✓ ***Почтальондар иғтибарына! Матбуғат баҫмаларының гәзит уҡыусыға бары тик почта хеҙмәткәрҙәре фиҙаҡәрлеге менән барып етеүен беләбеҙ, уларҙың хеҙмәтен юғары баһалайбыҙ. 2014 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барған әлеге мәлдә почтальондарға шундай тәҡдим: кем дә кем 50-80 дана "Киске Өфө"гә яҙҙыра, улар беҙҙең матур бүләктәргә (кәрәҙле телефон, микротулҡынлы мейес, электр ит турағысы, блендер һ. б.) лайыҡ буласаҡ. Бүләктәрҙе алыу өсөн почтальондың үҙе яҙҙырған квитанцияларҙың күсермәләрен редакцияға ебәреүе шарт.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2 - 8 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№44 (566)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Вариҫтарыбыҙ ҙа...**

тамырҙарын белһен, тип



5-6

**Ихтилалдарға...**

мәжбүр иткән сәбәптәр



7

**"Ерендә һатһаң, ауылында һат...**

Бер ситенә үҙең барып ултырырһың"



8-9

**Үлем алдынан...**

биш үкенес



12

14 **ТВ-программа**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Илебеҙ халҡы 7 ноябрҙе иң ҙур тантаналарҙың береһе күреп, 80 йылға яҡын байрам итте, ә хәҙер ул ҡыҙыл календарҙан төшөп ҡалды. Тарихты шулай еңел генә хәтерҙән юйҙырыу мөмкинме - һеҙ нисек уйлайһығыҙ?



***Наил МЫРҘАГИЛДИН, Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институты магистры:*** Тарихтан мәғлүм булыуынса, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы 1917 йылдың 25 октябрендә була, 1918 йылда Рәсәй яңы календарға күскәндән һуң был дата 7 ноябрҙә билдәләнеп килде. Донъялар үҙгәреп киткәс, Борис Ельцин тарафынан илебеҙ тормошонда килеп тыуған тынысһыҙлыҡ һәм ығы-зығыны үҙенсә көйләү йәһәтенән, күрәһең, Октябрь революцияһы көнө "Теләктәшлек һәм килешеү көнө" тип үҙгәртелде. Аҙағыраҡ РФ Дәүләт Думаһы сығарған закон буйынса 4 ноябрь "Халыҡтар берҙәмлеге көнө" тип билдәләнә башланы. Шулай итеп, 2005 йылдан алып илебеҙҙә 7 ноябрҙе Октябрь революцияһы көнө булараҡ байрам итеү туҡтатылды. Минә ҡалһа, иң билдәле дәүләт байрамдарының береһен ҡыҙыл календарҙан алып ташлап, бер аҙ ҡабаландылар, ахырыһы. Нимә генә тиһәң дә, Советтар Союзы донъя аренаһында АҠШ-ҡа ҡаршы торорҙай ҡеүәтле һәм ҙур дәүләт ине. Октябрь революцияһы көнө халҡыбыҙҙы һәр саҡ берләштереп, яңынан-яңы еңеүҙәргә, ҡаҙаныштарға әйҙәп, рухландырып торор булды. Мәҫәлән, ошондай бер тарихи фактты ғына алып ҡараһаҡ та, ул әле әйткәндәрҙе бик яҡшы дәлилләй: илебеҙ өсөн дәһшәтле мәлдәрҙең береһендә, фашист илбаҫарҙары Мәскәүгә яҡынлашҡас, 1941 йылдың 7 ноябрендә Ҡыҙыл майҙанда хәрби парад үткәреlә һәм унда ҡатнашҡан полктар ғәскәрҙәре илебеҙ йөрәге булған ошо майҙандан тура фронтҡа китә. Был ваҡиға үҙе бер символик мәғәнәгә - мөһим сәйәси әһәмиәткә эйә була һәм ул халҡыбыҙҙың еңеүгә ышанысын нығыта. Аҙаҡ, тыныс ваҡыттарҙа ла, ил халҡы тантаналы митингылар, хәрби парад һәм тыныс демонстрациялар үткәреп, был байрамды киң билдәләй торғайны. Шуға күрә, уны тыйырҙан алда, был хаҡта халыҡтың фекерен белергә кәрәк булғандыр, тип уйлайым. Ә бит йәмәғәтселек фекерен өйрәнеүсе абруйлы Левада-Үҙәк мәғлүмәттәренән генә күренеүенсә лә респонденттарҙың 50 проценты был байрамды бөтөрөү кәрәкмәй ине, тигән фекерҙә. Белоруссияла, мәҫәлән, был байрам тейелгеһеҙ килеш ҡалды, афарин уларға!

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ЗЫЯЛЫЛАР - "КИСКЕ ӨФӨ" ТУРАҺЫНДА*

# ЫСЫНБАРЛЫҠ ЯҘЫЛА

**Башҡортостан матбуғаты йөҙөн сағылдырған баҫмалар һәр береһе үҙ алдына ҡуйылған бурысты үтәй килә ул. Әммә "Киске Өфө"нөң барлыҡҡа килеүе башҡорт йәмғиәтендә мөһим бер ваҡиға булды. Эйе, иң тәүҙә уны Өфөлә сыҡҡан урыҫ гәзитенең тәржемәһе итеп ҡабул иткәйнеләр. Ләкин һуңынан халыҡ уның үҙ аллы, үҙ йөҙлө гәзит булыуын аңланы. Баҫманың абруйы артты.**



"Киске Өфө"нөң бәҫе бик ҙур бөгөн. Шуны айырыуса билдәләргә кәрәк: "Киске Өфө" гәзитендә ысынбарлыҡ яҙыла. Ысынбарлыҡ, тип мин шуны әйтәм: һәр бер баҫма, ул теләйме, теләмәйме, ниндәйҙер миҡдарҙа, йөҙҙөң алтмыш, етмеш өлөшөн, тип әйтәйек, билдәләнгән бер ҡуласа эсендә фекер йөрөтөргә тырыша. Ә "Киске Өфө" анығыраҡ, үҙ һүҙлерәк, үҙ йөҙлө, бойондороҡһоҙ күренә. Мин уның сыға башлауын башҡорт халҡы өсөн генә түгел, бар төрки донъяһы өсөн оло ваҡиға булды, тип һанайым. Булған ваҡиғаны, тарихты, булмышты сағылдырыуҙа ҡалыплашыу, башҡаларға эйәреү, ысынбарлыҡты күрһәтә белмәү кеүек "ауырыуҙар" менән сирле баҫмалар араһында "Киске Өфө" үҙ маҡсатын билдәләгән, йүнәлешен белгән, эште тейешле ойошторған гәзит.

Ә шулай ҙа ҡайһы бер саҡтарҙа был гәзиттең биттәрендә әле әйтелмәгән, әйтелергә тейешле һүҙҙәрҙе лә уҡығы килә. Мәҫәлән, телебеҙ, уның төрлө аспекттары тураһында мәғлүмәттәрҙе әленән-әле яҙып торорға кәрәк. Үҙҙәрен бөйөк тип иҫәпләгән милләттәр телдәренән айырмалы, беҙҙең башҡорт теле күпкә бай бит ул. Мәҫәлән, урыҫ телендәге һүҙҙәрҙең яртыһы - төрки тамырлы. Төрки телен белмәгәс, үҙҙәрен ғалим тип йөрөгән иптәштәр һүҙҙәрҙең мәғәнәһен дә төшөнмәй. Шуға күрә Рәсәй тарихы фәнендә яңылышлыҡтар бик күп. Уның нигеҙендә ана шул тел белмәү ята. Нимәһе үкенесле: тел белмәү һаман да дауам итә. Ә бит бөрәү ҙә башҡа телдәрҙе өйрәнеүҙән ярлыланмаған.

"Киске Өфө" ошондай тарихтың, мәҙәниәттең асылмаған һәм асыҡланмаған биттәре буйынса күберәк яҙһын ине, тип теләйем. Бигерәк тә йәштәргә, балаларға тарихи хәҡиҡәтте түкмәйсәсмәй еткереү фарыз. Үҙ тамырын, тарихын, телен белмәгән йәш кеше ниндәй киләсәккә нигеҙ һалһын да, унан ниндәй илһөйәр сыҡһын? Әйтәһе һүҙем: "Киске Өфө" үҙебеҙҙең төрки донъяһы, башҡорт халҡы тарихын өйрәнеүгә иғтибарҙы тағы ла нығыраҡ арттырһын ине.

**Спартак ИЛЬЯСОВ, тарихсы.**

Ҡорған өлкәһе ағинәйе.

ИШАРА

# ҮҘЕБЕҘСӘ УЙЛАЙЫҠ,

## үҙебеҙсә йәшәйек

**Шағирыбыҙ Рәми Ғариповтың "Урал урманы" шиғырында:**
**"Ҡарағайҙар һәм беҙ ҡырағайҙар,**
**Бергә үҫтек, бергә шауланыҡ.**
**Сәнғәт серен, юҡ һүрәттән түгел,**
**Тәбиғәттән генә яуланыҡ", -**
**тигән юлдарын уҡыным да, "Ниңә әле беҙ сит илдәр фәлсәфәһен, психологияһын үҙ итәбеҙ, улар тураһында уҡырға яратабыҙ, хатта улар фекере алдында баш эйәбеҙ?" тип уйлап ҡуйҙым. Шунан уйымдан ғына "Мин башымды сит ил фекере менән тултырмай, саф башҡортса фекерләгем, башҡорт аҡылы менән йәшәгем килә!" тип ҡырт киҫеп ҡуйҙым.**

Һәр саҡ шуны шөйләйем: журналистар, яҙыусылар үҙҙәрен бик текә, белемле итеп күрһәткеләре килһә, яҙған яҙыуҙарында һәр саҡ сит ил вәкиленең китабынан миҫал, әйтем, өҙөк килтерә. Бер саҡ телевизион тапшырыуҙа йәш кенә журналист ҡыҙыҡай космонавт Гречконан интервью ала: "Космосҡа осоу, фәндең әүҙем үҫеше, юғары технологияларға ҡарашығыҙҙы белгем килә?", - тигән булды һорауы. Космонавт: "Минең уйым буйынса, кешеләр юҡҡа ғына үҙ мәмерйәләрен ташлап сыҡҡан. Йәшәһендәр ине һаман таштарға һүрәттәр төшөрөп, һунарға йөрөп, саф һыу эсеп, саф һауа һулап, усаҡ тирәләй һикереп бейеп, йырлап..."- тип көлдөрөп алды.

Был шаяртыу ғына, әлбиттә, ләкин беҙҙең йәнебеҙ әрнеүе, йәнебеҙ ауазы ла бар ул шаяртыуҙа. Фән, технологиялар үҫешкән һайын кешене кеше иткән иң гүзәл сифаттар юғала, мәрхәмәтле, илһөйәр, йылмайып йәшәгәндәр кәмегәндән-кәмей һымаҡ күренә. Космонавт Гречко көлөп һөйләһә лә, саф һауа, саф һыу бөтәбеҙҙең дә хыялы ғына булып бара бит.

Көнбайышҡа, Америкаға оҡшарға тырышыу, уларса текә булырға, уларса йәшәргә, уйларға ынтылыу балаларыбыҙҙы, йәштәребеҙҙе ҡайҙа алып бара? Йыш ҡына беҙ, өлкәндәр ҙә, был хәлдең әҙәмтәләре тураһында уйламайбыҙ, йәш быуынға үҙ халҡыбыҙҙың аҡыл байлығына таяныу, ул байлыҡты юғалтмау мөһим икәне тураһында һөйләүҙе, аңлатыуҙы кәрәкле тип тапмайбыҙ бит.

Үҙемдең тормошомдан бер ҡыҙыҡ хәлде яҙайым әле. "Будь здоров!" тигән бер гәзиттә нисек медитация хәләнә инеп, һаулығыңды яҡшыртырға өйрәттеләр. Йәнендең, аныңдың тәнеңдән осоп сығыуына өлгәшеү ысулдарын уҡып, сеансҡа ултырҙым, гәзиттә яҙылған күнекмәләрҙе еренә еткереп үтәнем. Тын ғына ултырам. Ойоғандай булдым. Бер саҡ бәләкәй бүлмәмдең иҙәне өҫтөнә әкренләп һыу ҡалҡа башлағанын тоям. Үтә күренмәле, таҙа, саф һыу. Ул һыу бөтә бүлмәне тултырғандай, өҫкә ҡалҡа барғандай тойола. Һыу күтәрелеп минең тубыҡыма етте тигәндә, ҡурҡыу тойғоһонан тертләп китеп, медитация хәләнән сыға һалдым. "Күккә осаһың, имеш, тип яҙғайнылар был медитация мәлендә, ә мин һыуға бата яҙҙым", тип көлөп тә алдым һуңынан. Ә йәнең күккә оса, уны кире тәнеңә ҡайтара алмай ҡуйһаң, бөттө баш, тип, теләһә ниндәй сит ил күнекмәләре менән ҡыҙыҡһыныуымды туҡтаттым...

Былар менән ни әйтмәксемен? Үҙ-үҙеңә генә йомолоп йәшәргә саҡырмайым. Көнбайыш фекерҙәрен уҡырға, тыңларға, әммә үҙебеҙсә фекерләргә, йәшәргә кәрәк! Һәр милләт, һәр ил үҙ үҙенсәлеген һаҡлап ҡалып, үҙ юлы менән үҫешһен. Шул саҡ күп төрләлөк үҙе гүзәл байлыҡ булыр.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Илебеҙ халҡы 7 ноябрҙе иң ҙур тантаналарҙың береһе күреп, 80 йылға яҡын байрам итте, ә хәҙер ул ҡыҙыл календарҙән төшөп ҡалды. Тарихты шулай еңел генә хәтерҙән юйҙырыу мөмкинме - һеҙ нисек уйлайһығыҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Лариса АБДУЛЛИНА, шағирә, Шәйехзада Бабич исемендәге Республика йәштәр премияһы лауреаты:*** 7 ноябрь элегерәк, мин бала сакта, ҙур совет дәүләтендә оло байрам итеп үткәрелә торғайны. Беҙ, балалар, шиғырҙар ятлап, концерт номерҙары әҙерләп, Бөйөк Октябрь революцияһы тантаналарын өлкәндәр менән бергә байрам итергә демонстрацияға сыға торғайныҡ.Ул ваҡытта был көн ысын мәғәнәһендә иң төп ваҡиғаларҙың береһе булараҡ билдәләнә ине."Башҡорт халҡы элек назан булған, совет властьы уларға белем, Ильич лампочкаларын, етемдәргә балалар йорто бирҙе, " тип уҡытылар ине беҙҙе. Әммә тик шунда ғына булдымы икән революцияның ҡаҙанышы?! Башҡорт халҡы революцияға тиклем дә аңһыҙ, белемһеҙ булмаған - ҡайҙарға ғына барып белем алмаған атабабаларыбыҙ! Ошо йәй Интернет селтәрендә Нобель премияһы лауреаты, яҙыусы Александр Солженицындың бер мәҡәләһенә тап булдым, күҙемдән сөбөрләп йәштәр аҡты. Бына нимә тип яҙа ул:"1917-1926 йылдарҙағы һуғышта, уны баҫтырыуҙа һәм аслыҡ осоронда миллиондан ашыу башҡорт һәләк булды, йәки был революцияға тиклемге халыҡтың 58,7 проценты. Большевиктар революцияһы йылдарында башҡорт халҡының фажиғәһе - донъя тарихындағы иң ҙур геноцидтарҙың береһе..." Хәйер, ул мәҡәләне тотошлайы менән уҡып сығырға кәрәк, сөнки был өҙөк кенә кемгәләр тәьҫир ҙә итмәҫ. Шуға иғтибар итегеҙ: тарихсылар хәҙер революция беҙгә файҙанан бигерәк күберәк зыян килтерҙе, тигән фекерҙе асыҡ әйтә. Шуға күрә мин был байрамды элеккесә тантаналы рәүештә ҡаршылай алмайым. Ғәфү итегеҙ, халҡың вәкилдәре ҡырылған көн байрам була аламы ни?!

***Марат ИШМӨХӘМӘТОВ, халыҡ табибы:*** Октябрь революцияһының бөтә донъя кимәлендәге әһәмиәтенә тарихсылар күптән фәнни нигеҙләмә бирҙе инде. Эйе, ҡараштар һәм баһаламалар заманына ҡарап үҙгәреп тә тора, яңы мәғлүмәттәр, яңы власть башлыҡтары, яңы системалар барлыҡҡа килә, тик тарихи факт ҡына үҙгәрмәй ҙә, үҙенән-үҙе икенсе бер датаға күсмәй ҙә, юҡҡа ла сыҡмай. Үткән быуаттың 90-сы йылдар башында 7 ноябрь байрамының да исеме үҙгәртелде һәм 4 ноябргә шылдырылды. Тик шуныһы: тарихи ваҡиғаның исемен үҙгәртеү менән уның есемен үҙгәртеп булмай, сөнки ул - тарих, ә уны танымаҫҡа беҙҙең хаҡыбыҙ юҡ. Бер аҡыл эйәһе әйтмешләй, тарихы булмағандың - киләсәге лә юҡ. Әлегесә үткәндәргә күперҙе яндырырға маташыу, ҡырҡа ғына тарих ебен өҙөү дөрөҫ түгел, тигән фекерҙәмен. Нисек кенә булмаһын, беҙҙең быуын совет тәрбиәһе алды. Уҡып сығып, һөнәр алып, шөкөр, бөтәбеҙ ҙә ғүмер буйы эшләнек, күптәребеҙ хаҡлы ялда булһа ла әле лә эшләүгән дауам итә. Аҡса етмәгәндән генә түгел, ә эшләмәйенсә бот күтәреп ятыу беҙҙең быуынға хас булмағанға күрә. Совет осороноң мәғариф һәм тәрбиә системаһын бер ҙә яманлай алмайым. Һәр хәлдә, бөгөнгө кеүек телевидение, интернет аша йәш быуынды аҙҙырыу, юлдан яҙҙырыу, эсеү, тартыу, көс ҡулланыуҙы йәшерен пропагандалауға ул саҡ юл ҡуйылманы. Әле иһә балалар аңына емерткес идеология, зомбилаштырыу программаһы һалына. Октябрь революцияһын ниндәйҙер яуызлыҡ сығанағы тип күрһәтергә маташыу, тарихыбыҙға төкөрөү, уны мыҫҡыллау факттарҙы боҙоп күрһәтеүҙән, халыҡ байрамын тыйыуҙан ғына түгел, ә һәйкәлдәрҙе алып ташлауҙан, совет осороноң ыңғай әһәмиәтен танымай, фәҡәт кире яҡтарын ғына тылҡыуҙан башланды ла инде. Ләкин тарих - бөйөк һәм тейелгеһеҙ ул, көслө һәм емерелмәҫ фактор, айырым власть эйәләренең, ҡайһы бер реакцион көстәрҙең сәбәләнеүҙәренә ҡарап ҡына ул үҙгәрмәйәсәк, ә нисек бар, шулай ҡаласаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 384 һум 36 тингә, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылырға була.**

Октябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** һәм 10 уҡыусыбыҙ Гөлфиә Янбаеваның **"Елле фекерҙәр елгә осмаһын"** тигән китаптарына лайыҡ буласаҡ.



**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов етәкселегендә республиканың рәсми делегацияһы "Крокус Экспо" күргәҙмә үҙәгендә асылған "Асыҡ инновациялар" Мәскәү халыҡ-ара инновация үҫеше форумында ҡатнашты. "Глобаль баҙарҙарҙа уйын ҡағиҙәләре: алдынғы технологиялар һәм уларҙы уйлап сығарыусылар" темаһына арналған форумдың көн тәртибенә ҡыҙыҡлы осрашыуҙар, түңәрәк ҡорҙар конкуренцияға һәләтлелек мәсьәләләре буйынса фекер алышыуҙар индерелгән.

✔Рәсәйҙең Сириялағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы Илсеһе, Башҡортостанда тыуып үҫкән Азамат Ҡолмөхәмәтов Батырлыҡ ордены кавалеры булды. Юғары наградаһы уға ил Президенты Владимир Путин тапшырҙы. Дәүләт башлығы билдәләүенсә, Рәсәй дипломаты һәм уның коллегалары Сирия кризисының иң ҡатмарлы осоронда "Тыуған ил мәнфәғәттәрен яҡлауҙа ныҡ тороу һәм принципиаллек күрһәтте". Азамат Рәхмәт улы Ҡолмөхәмәтов 1953 йылда Өфөлә тыуған, уның атаһы сығышы менән Ишембай районының Ҡанаҡай ауылынан. Азамат Ҡолмөхәмәтов СССР Сит ил эштәре министрлығының Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтын (МГИМО) тамамлаған. 1978 йылдан алып сит илдәрҙә төрлө дипломатик вазифаларҙа эшләй. 2011 йылдың 7 сентябренән - Сирия Ғәрәп Республикаһында Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы Илсеһе.

✔Өфө районының Алексеевка ҡасабаһында Башҡортостан Республикаһы мосолмандары Диниә назаратының киңәйтелгән пленумы үтте. Көн тәртибендәге төп мәсьәләләрҙең береһе булып 26 ноябрҙә үтәсәк сираттағы пленумда Башҡортостан мөфтөйө вазифаһына кандидаттар раҫлау торҙо. Фекер алышыуҙар һөҙөмтәһендә пленумда ҡатнашыусылар Башҡортостан мөфтөйө вазифаһына ике кандидатураны раҫланы: хәҙерге БР мосолмандар Диниә назараты рәйесе Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин һәм Баймаҡ районы имаммөхтәсибе Баймөхәмәт Ғиззәтуллин.

✔Өфөнөң Дим районында мәктәп-интернаттарҙа уҡыусыларҙың, башланғыс мәктәп-балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүселәрҙең XI Республика мәҙәни-спорт фестивале үтте. Фестивалдә республиканың 38 муниципаль белем биреү мәктәбенән 200-ҙән артыраҡ кеше ҡатнашты.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ЯҠТЫЛЫҠ ҠАЙҘАН СЫҒА...

## ҡеүәт тә шунда

**Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми үҙенең бер сығышында XX быуатҡа ҡарата "Беҙҙең илдә кешеләргә эксперимент яһау быуаты булды" , тигән баһа биргәйне. Был быуатта илебеҙҙә күпләп халыҡтың ҡырылыуын күҙ уңында тотҡанда, ысынлап та, уға башҡа төрлө баһаның бирелеүе лә мөмкин түгелдер. Демограф Анатолий Вишневский фекеренсә, XX быуатта Рәсәй төрлө һуғыштар, аслыҡтар, золомдар, экологик һәм социаль һәләкәттәр һөҙөмтәһендә 140-150 миллион кешеһен юғалтҡан. Һүҙ юҡ, илебеҙ халҡының күпләп кәмеүенең юғарыла атап үтелгән сәбәптәре барыбыҙға ла мәғлүм һәм был бәхәсһеҙ. Әммә сәбәптәр тик шунда ғынамы икән? Әйҙәгеҙ, булмаһа, ҡыҙыҡлы бер статистикаға күҙ һалайыҡ та, артабан фекерләүҙе шул йүнәлешкә бороп ҡарайыҡ. Мәғлүмәттәр "Википедия"нан алынды.**



- Рәсәй Федерацияһы - биләгән майҙанының ҙурлығы буйынса донъяла 1-се урында тора. Халҡының һаны - 143 миллион 548 мең 980;
- Африка - биләгән майҙаны буйынса донъяла 2-се урында, халҡының һаны - 1 млрд. 032 миллион;
- Ҡытай - биләгән майҙаны буйынса донъяла 3-сө урында, халҡының һаны - 1 млрд. 349 миллион 585 мең;
- АҠШ - биләгән майҙаны буйынса донъяла 4-се урында, халҡының һаны - 316 миллион 668 мең 567;
- Бразилия - биләгән майҙаны буйынса донъяла 5-се урында тора, халҡының һаны - 201 миллион 009 мең 622;
- Һиндостан - биләгән майҙаны буйынса донъяла 7-се урында, халҡының һаны - 1 млрд. 220 миллион 800 мең;
- Финляндия - биләгән майҙаны буйынса донъяла 64-се урында, халҡының һаны 5 миллион 180 мең;
- Төньяҡ Корея - биләгән майҙаны буйынса донъяла 98-се урында, халҡының һаны - 24 миллион 270 мең 407;
- Көньяҡ Корея - биләгән майҙаны буйынса донъяла 107-се урында, халҡының һаны - 48 миллион 955 мең 203;
- Швейцария - биләгән майҙаны буйынса донъяла 132-се урында, халҡының һаны - 7 миллион 996 мең 026;
- Германия - биләгән майҙаны буйынса донъяла 62-се урында, халҡының һаны - 81 миллион 147 мең 265;
- Япония - биләгән майҙаны буйынса донъяла 61-се урында тора, халҡының һаны - 127 миллион 253 мең 075;
- Монголия - биләгән майҙаны буйынса донъяла 18-се урында, халҡының һаны - 2 миллион 854 мең 685;
- Исландия - биләгән майҙаны буйынса донъяла 105-се урында, халҡының һаны - 321 мең 857;
- Ҡаҙағстан - биләгән майҙаны буйынса донъяла 9-сы урында, халҡының һаны - 17 миллион 010 мең 600;
- Берләшкән Ғәрәп Эмираттары - биләгән майҙаны буйынса донъяла 114-се урында тора, халҡының һаны - 8 миллион 450 мең 865;
- Иран - биләгән майҙаны буйынса донъяла - 17-се урында, халҡының һаны - 79 миллион 853 мең 900;
- Төркиә - биләгән майҙаны буйынса донъяла 36-сы урында, халҡының һаны - 75 миллион 627 мең 384.

Юғарыла килтерелгән миҫалдарҙан ниндәй һығымталар яһарға теләүемде аңлап торабыҙҙыр, моғайын. Һығымталарҙы иһә түбәндәгесә яһарға мөмкин булыр ине:

1. Бында һандар бик күп нәмә хаҡында һөйләй: демограф Анатолий Вишневский килтергән дәлилдәр генә, йәғни төрлө һуғыштар, аслыҡтар, золомдар, экологик һәм социаль һәләкәттәр генә халыҡ һанының артыуының йә кәмеүенең сәбәбе була алмауға ла ишара бар уларҙа. Африкала, Һиндостанда, Төньяҡ Кореяла, Көньяҡ Кореяла, Иранда, Ғәрәбстанда халыҡтың һанын кәметеүгә килтергән сәбәп-ваҡиғалар булып тора, әле булһын дауам итә. Африкала һуғыштар, ғәмүмән, бер ваҡытта ла тынғаны юҡ, ҡоролоҡтоң, аслыҡтың иң ҙур афәтен дә улар күрә. XX быуатта ике Ватан һуғышында Рәсәйҙең һәм СССР-ҙың төп дөғәүсеһе булған, икенсе һуғышта ҡыйралыуға дусар ителгән Германия халҡының артыҡ кәмемәүе лә был фекергә инанырға мәжбүр итә.

2. Донъяның иң һалҡын илдәре һаналған, һуңғы быуаттарҙа сағыштырмаса һил йәшәгән, майҙаны буйынса донъяла 18-се урында булһа ла, ни бары 2 миллион 854 мең 685 кенә кеше йәшәгән Монголия, 17 миллиондан ауыш кеше йәшәгән Ҡаҙағстан, Исландия миҫалдары ҡояштан алыҫлашҡан һайын кеше һанының да кәмей барыуына ишаралай.

3. Юғарыла килтерелгән мәғлүмәттән беҙ шуны аңлайбыҙ: ҡайһы илдәр һәм ҡайһы милләттәр көнсығышҡа яҡыныраҡ урынлашҡан, уларҙа тыуым да юғары. Демографияға, әлбиттә, демограф Вишневский килтергән сәбәптәр ҙә йоғонто яһай, әммә барыбер ҙә иң ҙур йоғонто - Ҡояш әсәйҙеке!

Атаҡлы халыҡ йыраусыһы, яҙыусы Спартак Ильясов үҙенең "Буғай хаким" тигән әҫәрендә донъялыҡтың яҡтылыҡ, Ҡояш феноменын түбәндәгесә аңлата: "Яҡтылыҡ ҡайҙан сыға, ҡеүәт тә шунда. Ә көс барлыҡ тереклекте уята. Бер ҡеүәтте икенсе төрлөгә әйләндерә. Тимәк, ҡояш сыҡҡан яҡ - көнсығыш барлыҡ илаһи ҡеүәткә эйә. Ҡалған булмыштар уға буйһона, эйәрә, хасил була. Көнбайыш инде бөтә параметрҙары буйынса сереүгә юл алған. Ул үләсәк, рух үлеме дәүләттәрҙе лә, кешеләрҙе лә буш ҡыуыҡҡа әйләндерәсәк. Әлбиттә, быға йөҙ йыллыҡтар кәрәк..."

Автор үҙенең ошо ҡыҫҡа ғына кәлимәһендә донъяның ике тарафҡа бүленешенең мәғәнәһен асҡан да биргән. Юғиһә, беҙ "Европаса йәшәргә ынтылабыҙ", "Америкаса йәшәү өлгөһө", тип, үҙебеҙҙең асылға бөтөнләй тап килмәгән тормошҡа ынтылабыҙ. Ҡояш һирәк-һаяҡ төшкән йылы урындың һаҙлыҡҡа, сереүгә дусар ителгәнен белгәүрә, бындай ынтылышыбыҙҙың нимәгә алып килерен күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ шул. Был һүҙҙәрҙе әйтеүсенең "быға йөҙ йыллыҡтар кәрәк"тиеүе менән генә бер аҙ килешмәҫкә мөмкин. Көнбайыштың юҡҡа сығыу мөҙҙәтен оҙаҡҡараҡҡа һуҙа, буғай, автор. Көнбайыштың бөгөн уҡ йәшәүгә һәләтһеҙ булыуына шаһитбыҙ бит инде.

Спартак Ильясов үҙенең "Буғай хаким", "Вариҫтар ил ҡурсалай", "Болоттар ҡуйырғандан ҡуйыра", "Хәтерҙә ҡалғандар", "Үҙ тарихым асылы", "Олатайҙар тотҡан ҡоралдар" тигән яҙмаларында, "Ҡолой кантон Көсөков" тигән романында, "Яраһыҙ яралары", "Барын-Табын хәтере" тигән китаптарында Башҡорт иленең көнсығыш сигендә йәшәүсе барын-табындарҙың бер нисә быуат буйына ерба-ҫарҙарға ҡаршы көрәшен бәйән итә. Шундайын күп ҡорбандар биреп, ниңә был ерҙәрҙе дошман ҡулына бирмәҫкә теләгән һуң барын-табындар? Был, беренсенән булһа, икенсенән, Себер ханлыҡтары, ҡалмыҡтар, Рәсәй батшалығы ни өсөн иң ҙур көсөн фәҡәт ошо тарафҡа йүнәлдергән һуң? Һүҙ юҡ, башҡорттар меңәр йылдар буйына көн иткән гәзиз атайсалын һәм Башҡорт илен Шәреҡ донъяһы, ҡеүәт килгән көнсығыш менән тоташтырған ҡапҡаны ла һаҡлап ҡалырға тырышҡан. Көнсығышҡа ҡапҡа - ул шул уҡ Ҡояшҡа ла бара торған юл. Ә Уралтауҙы баҫып алырға теләүселәр иһә, быуаттар буйына Башҡорт иленә яҫҡынып-яҫҡынып, уларҙы яуҙа еңеү мөмкин булмағанлыҡтан, Уралтауҙы Ҡояш менән бәйләүсе көнсығышҡа ташланған. Башҡорт илен Шәреҡ менән дә, Ҡояш менән дә, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең изге һөйөктәре яткан ғәрәп иле менән дә тоташтырыусы урын булған барын-табындарҙаң тереклек иткән төбәге.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы. Башы 43-сө һанда).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә ойоштороу конференцияһында Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының төбәк бүлексәһе төҙөлдө. Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты республика бүлексәһенең ҡушма рәйестәре итеп Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, парламент комитеты етәксеһе Эльвира Айытколова, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты проректоры Максим Михайлов һәм БР Сауҙа-сәнәғәт палатаһының вице-президенты Азат Фазлыев һайланды. Эльвира Айыткoлова билдәләп үтеүенсә, "хәҙер улар алдында Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты бүлексәләрен урындарҙа - республиканың ҡала һәм райондарында ойоштороу бурысы тора".

✓Баймаҡта опека һәм попечителлек органдары белгестәре, балалар йорттары етәкселәре һәм муниципалитеттар башлыҡтары урынбаҫарҙары ҡатнашлығында Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы ведомство-ара советтың ҡусмә ултырышы уҙҙы. Ултырышты вице-премьер Лилиә Ғүмәрова алып барҙы. Билдәләнеүенсә, әле республикала 24 балалар йорто эшләй, уларҙа бер меңдән ашыу бала тәрбиәләнә. Әммә ҡайһы бер балалар йорттарында үҙ-ара ихлас мөнәсәбәттәр төҙөй алмау күренештәре бар. Был күренештәр учреждение етәкселәренең кадрҙарҙы ентекле һайлап алмауы, яҡшы белгестәр - психологтар һәм дефектологтар етешмәүе тураһында һөйләй.

✓5-6 ноябрҙә Өфөлә Матбуғат һәм киң коммуникациялар буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында ойошторолған "Минең ҙур илем" II төбәк-ара телевизион фестивале үтәсәк. Фестивалдең маҡсаты - йолаларҙы һәм этно-мәҙәни төрлөлөктө һаҡлау һәм үҫтереү, мәҙәниәт-ара һәм дин-ара мөнәсәбәттәрҙе гармониялаштырыу, милләт-ара аралашыу мәҙәнилеге тәрбиәләү, күп милләтле Рәсәй халҡының үҙ-ара татыулығын һәм рухи берҙәмлеген нығытыу темаһына иғтибарлы йәмәғәтселек һәм киң мәғлүмәт саралары иғтибарын йәлеп итеү.

✓Башҡортостанда йәшәүсе һәр кем почта элемтәһе бүлексәһендә йомшаҡ айыу һәм байрамдың төп символы - күгәрсен күҙе сәскәһе төшөрөлгән ҡотлау открыткаһы һатып ала ала, уны Рәсәй Почтаһы махсус рәүештә Әсә көнөнә арнап сығарған. Әсә көнө - халыҡ-ара байрам. Йыл һайын ноябрҙең һуңғы йәкшәмбеһендә Ер шарының төрлө мөйөштәрендә йәшәүсе кешеләр әсәләрен ҡотлай, уларға сәскәләр һәм йылмайыу бүләк итә, үҙҙәренең һөйөүен һәм ихтирамын белдерә. Рәсәйҙә байрам 1998 йылдан билдәләнә.

**✓ Мине аптыратҡан тағы бер нәмә бар. Утыҙ йыл элек Өфө бәләкәйерәк ине, ләкин миллионлы ҡала булды. Бөгөн ҡала территорияһы киңәйҙе, йорттар бейегәйҙе, ләкин һаман булһа Өфө миллионлы ҡала булып ҡала.**



БАШ ЙОРТТА



# ҠАЛАЛАРҘЫҢ...

## ғәҙәттәре сәйер

**Беренсе тапҡыр мин Өфөгә бишенсе синыфта уҡығанда килгәйнем. Үткән быуаттың етмешенсе йылдары булғандыр был. Бейек йорттарға ҡарап, һоҡланып йөрөнөм. Ҙур ҡалаға беренсе ҡат килеүем булғас, бигерәк һоҡланғыс күренде шул.**

Ҡабаттан студент йылдарында килдем Өфөгә. Бында биш йыл уҡыным. Элекке дуҫтар менән аралашҡанда хәҙерге Өфөнө элеккеһе менән сағыштырабыҙ ҙа: "Беҙ ул саҡта Өфөнө, ҙуу-ур ҡала, тип маҡтап йырлай торғайныҡ, баҡтиһәң, ул ваҡыттағы Өфө хәҙергеһе менән сағыштырғанда ҙур бер ауыл булған икән", - тибеҙ. Ул ваҡытта ағас өйҙәрҙең һаны таш өйҙәргә ҡарағанда күберәк ине әле. Тотош урамдар ағас йорттарҙан торҙо. Салауат һәйкәле янында шайтан ботон һындырырлыҡ шырлыҡ, бысраҡ, емерек өйҙәр ине (әле, Аллаға шөкөр, ул тирә ялтырап тора, матур, төҙөкләндерелгән, танымаҫлыҡ булып үҙгәргән).Хәҙер иһә Өфө ысын мәғәнәһендәге мегаполис статусына эйә. Матур скверҙар, урамдар, аллеялар, фонтандар, заманса йорттар беҙҙең ҡалабыҙҙы. Яңылары төҙөлә, төҙөкләндерелә, матурлана. Уйлап ҡараһаң, күҙгә күренеп үҙгәрә шул Өфө. Былтыр килгән кеше быйыл уны танымаясаҡ та.

Әммә баш ҡалабыҙҙың сәйер яҡтары ла бар. Ошо "ҡыҙыл һыҙыҡ" тип аталған үҙәк урамдарҙан саҡ ҡына ситкә сыҡтыңмы, тағы ла шул үткән быуатҡа әйләнеп ҡайтаһың да ҡуяһың. Ғөмүмән, ғәжәп күренеш тип табам быны: уртаһы мегаполисҡа оҡшаған, бер-ике квартал ғына ситкә сыҡтыңмы, тағы ла ана шул йөҙ йыл элекке донъяға барып юлығаһың. Бысраҡ, иҫке, емерек йорттар. Шуныһы миңә оҡшамай. Әхмәр Үтәбай әйтмешләй, ҡалаларҙың ғәҙәттәре сәйер шул. Халыҡ бөгөн ниндәй, йөҙ йылдан һуң да шулай булып ҡаласаҡ, тигән бит бер аҡыл эйәһе. Үҙәк урамдар киңәйә бирер, матурайыр, ләкин үҙәк матурайған һайын, ситтәгерәк урамдар үгәйһетелгән көйө тора бирер. Мәскәүҙе, Нью-Йоркты, Парижды һәм донъяның башҡа икенсе берәй мегаполисын алайыҡ. Күккә ашып, ялтырап торған үҙәк алыҫайған һайын, иҫке йорттарҙан ғибрәт фәҡир кварталдар китә. Шуға күрә мин быны ғәҙәти хәл тип ҡарайым.

Мине аптыратҡан тағы бер нәмә бар. Утыҙ йыл элек Өфө бәләкәйерәк ине, ләкин миллионлы ҡала булды. Бөгөн ҡала территорияһы киңәйҙе, йорттар бейегәйҙе, ләкин һаман булһа Өфө миллионлы ҡала булып ҡала. Халҡы нинә шунса тапҡырға артманы икән, бына шуныһы минең өсөн ғәжәйеп хәл, парадокс. Ошо турала әллә күпме баш ватып ҡараным, ләкин әле булһа яуап таба алмайым. Бына шулай, ҡалаларҙың ғәҙәттәре сәйер.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ



# ОҪТАНЫҢ УРЫНЫ...

## түрҙә булһын ине лә бит

**Һәр ваҡыттағыса, алтын көҙ етеү менән, баш ҡалабыҙ Өфөлә муллыҡ һәм бәрәкәт йәрминкәләре башланып китә. Был Башҡортостаныбыҙ үҙаллылыҡ яулаған йылдарҙан алып үткәрелеп килгән һәм инде матур йолаға әйләнеп киткән сараларҙың береһе ул.**

Аҙна һайын шәмбе, йәкшәмбе көндәре баш ҡалабыҙҙы гөрләткән ошо йәрминкәләргә сығып ҡарау форсаты теймәгәйне быға тиклем, бәхеткә күрә, үткән шәмбе дебет шәл йәрминкәһенә тип сығып, Киров районы биләмәһендә ойошторолған дөйөм йәрминкәгә барып эләктем. Шуныһы ҡыуандырҙы: шөкөр, инләп-буйлап осона сыҡҡыһыҙ сауҙа рәттәрендә ҡош һөтөнән башҡа барыһы ла бар. Ит, бал, май, һөт ризыҡтары, балыҡ, йәшелсә, емеш-еләк; ҡышҡылыҡҡа йылы кейем-һалым, быймалар һәм, әлбиттә, әлеге беҙ эҙләгән дебет шәлдәр рәте. Ҡара көҙҙөң рашҡылап торған йонсоу бер көнөндә күкһел-һоро болоттарҙай ҡабарып ятҡан дебет шәлдәргә күреп, йылынып уҡ киттем: эй үҙебеҙҙең йомшаҡҡайҙар, йылыҡайҙар! Семәрләп, селтәрләп, төрлө биҙәктәр һалып, күҙ нурҡайҙарын түгеп, көнөл йылыһын биреп, кемдәр генә бәйләне икән уларҙы? Ә, бына бит береһенән-береһе уңған, береһенән-береһе сибәр хужабикәләр үҙҙәре лә теҙелеп баҫып тора, кемуҙарҙан үҙ тауарын һатып алырға димләй - Ейәнсура оҫталары былар. Дебет шәлдең рәтен белгән кеше ин тәүҙә улар янына килә, әлбиттә, Ейәнсура шәленең даны республикабыҙҙан алыҫтарға ла киң таралған. Бер шәл оҫтаны әйтмешләй, урыҫтарҙың Ырымбур шәле тип маҡтап йырлағаны, асылда, ана шул Ейәнсура шәлдәре инде ул! Беҙҙекеләр борондан шәлдәрен Ырымбур баҙарына алып барып һатып, Ырымбурға дан яһаған. Ярай, ни ҡылаһың, тип йыуаттым әлеге оҫта ҡуллы һылыуҙы. Башҡорт даны йылыһында кемдәр генә ҡыҙынмаған, унаһы күптән билгеле. Исеме ситтәргә эләкһә лә, есеме үҙебеҙҙә ҡала бит, оҫталыҡты тартып та, һатып та ала алмаҫтар барыбер, тигәйнем ул саҡ. Бигүк хаҡ булмағанмын икән, әле күрәм: башҡорт шәле данын тергеҙеп, үҙебеҙгә ҡайтарыусылар түгелме ни йыл һайын рашҡы, буран, ҡар-ямғыр тип тормайынса, Өфөгә килеп, йәрминкәлә ҡатнашыусы Ейәнсура, Күгәрсен, Мәләүез, Стәрлебаш уңғандары!

Ейәнсуранан йәрминкәгә райондың Иҫәнгол, Байыш, Яңыбай, Абзан, Үтәгол, Байдәүләт, Бикбау ауылдарынан 10 оҫта үҙ тауарын алып килгән. Үтәгол ауыл китапханаһыһы, оҫта шәл бәйләүсе Зәриә Рахманголова һөйләүенсә, ул үҙенең төп эшен дә яратып башҡара, егермеләп баш кәзә лә аҫырай, шәлен дә бәйләп һата, йорт-хужалығын да алып бара, ғаиләһен дә ҡарай - бына шундай улар, Ейәнсура һылыуҙары! Мәләүездең Смак, Һарыш, Бельский ауылдарынан да килеп еткәндәр. Ана, арыраҡ Күгәрсен районы оҫталары көҙгә әсе елде бар тип тә белмәй, матур милли кейемдәрҙә дәртле бейеүгә төшөп китте, үҙҙәре әҙерләгән башҡорт ашһыу өлгәләре лә алып килергә онотмаған улар. "Стәрлебаш биҙәктәре" хужабикәләр клубы күргәҙмәһе тирәһенә лә халыҡ йыйыла башланы. Сәриә Рысаева, Миңлегөл Ли, Венера Абутасова, Зөлфиә Табаевалар яҡларға килгән Стәрлебаш шәле данын.

Берсә ямғыр, берсә ҡар бөртөктәре һибәләп торған рашҡы мәлгә ҡарамайынса, тауыҡ сүпләһә лә бөткөһөҙ йорт-хужалыҡ эштәрен ташлап, алыҫ ерҙә яҡын итеп, баш ҡала йәрминкәһенә килеп еткән был һылыуҙарға фәҡәт "Афарин!" тиергә генә ҡәрәк, тик бына уларҙың көн оҙоно асыҡ һауала, елдә, ямғыр аҫтында тороуҙары ғына эсте бошорҙо. Йәрминкәнән ситтәрәк, юл аша айырым бер урында торғанлыҡтан, улар янына халыҡ та әллә ни килеп етешмәне, буғай. Әлбиттә, район кимәлендә үткәрелгән йәрминкәлә ҡатнашыусы шәл оҫталары өсөн генә айырым бина юллау мөмкин дә түгелдер, ләкин уларҙы йәрминкә биҙәге итеп кенә түгел, ә үҙҙәренә бер аҙ файҙа ла күрерлек отошлораҡ шарттарҙа күргә килгәйне лә, йәрминкәне ойоштороусылар был хаҡта уйлап еткермәгән, күрәһең...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

АФАРИН!

# ӨФӨБӨҘ ҺЫНАТМАЙ

**"Урбаника" территориаль планлаштырыу институты (Санкт-Петербург ҡалаһы) Рәсәй Архитекторҙар союзы менән берлектә булдырылған сираттағы "Рәсәйҙең 100 иң ҙур ҡалаһының интеграль рейтингы" тикшеренеүенә йомғаҡ яһаны.**

Был рейтинг йомғаҡтары буйынса Башҡортостандың баш ҡалаһы, илебеҙҙең Доңдағы Ростов (10-сы урын), Түбәнге Новгород (16-сы), Новосибирск (17-се), Силәбе (18-се), Санкт-Петербург (19-сы), Ҡазан (20-се), Һамар (21-се), Омск (24-се), Волгоград (25-се) һәм Пермь (28-се) кеүек ҙур ҡалаларын уҙып, туғыҙынсы урынды биләне. Етмәһә, Рәсәйҙең миллиондан ашыу кеше йәшәгән ҡалалары араһындағы интеграль рейтинг һөҙөмтәләре буйынса Өфө өсөнсө урында тора. Башҡортостан баш ҡалаһынан алда - Екатеринбург һәм Воронеж.

"Урбаника"ның төп маҡсаты - илдә "хаҡ" һәм "сифат" күрһәткестәре нисбәтендә йәшәргә иң ҡулайлы ҙур ҡаланы табыу. Ул ҡаланың йәшәргә йәлеп итеүсәнлеген күтәреү буйынса үткәрелгән сәйәсәт һөҙөмтәлелеген сағыштырып баһаларға мөмкинлек бирә.Тикшеренеүҙәр барышында, ҡала мөхитенең сифаты кеүек, ҡалала йәшәүселәр өсөн мөһим параметрҙар иҫәпкә алынды. Улар араһында - торлаҡ менән тәьмин ителеш, заманса ҡулланыу форматтары булыу, ҡала юлдарында транспорт күпләге кимәле, енәйәтселек кимәле, ҡаланың яҡтыртылыуы, шулай уҡ тәбиғәт шарттарының уңайлылыҡ кимәле, төҙөкләндереү һәм экологик бысраныу кимәле.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәйҙең 100 иң ҙур ҡалаһы интеграль рейтингында 170 меңдән ашыу кеше йәшәгән ҡалалар ҡатнаша, уларҙа илебеҙ халҡының 44 проценты йәшәй. Уларҙан 68 ҡала Федерация субъекттарының баш ҡалалары булып тора, ә ҡалған 32-һе - икенсе кимәлдәге төбәк ҡалалары.

**"Башинформ".**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Күгәрсен районында Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияны тапшырыу тантанаһы үтте. Сарала БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов ҡатнашты. Был премияға 24 журналист дәғүә итте, өсөүһе - "Өмөт" гәзитенең баш мөхәррире Рәдис Ноғоманов, "Башҡортостан" гәзитенең фотохәбәрсеһе Айрат Нурмөхәмәтов, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының телевидение студияһы бүлеге начальнигы Зөлфиә Рәхмәтуллина премия лауреаттары булды. Район премияһын тележурналист Сәрүәр Сурина алды.

✓Башҡортостан Республикаһының льготаларға хоҡуғы булған бөтә граждандары иҫәбенән 75,6 проценты социаль хеҙмәтләндереүҙәр йыйылмаһының аҡсалата эквивалентын һайланы. Киләһе йылда улар пенсия менән бергә ай һайын аҡсалата компенсация аласаҡ. Хәҙерге ваҡытта соцпакет хаҡы айына 839 һум 65 тин тәшкил итә. 2014 йылдың ғинуарынан Башҡортостан райондары һәм ҡалаларындағы идаралыҡтар федераль льготаларға эйә булыусыларҙан 2015 йылға ғаризалар ҡабул итә башлай.Республикала федераль льготаға эйә булыусыларҙың дөйөм һаны 366 мең 519 кеше тәшкил итә.

✓Башҡортостандың почта бүлексәләрендә "Ҡыш бабайҙан ҡотлау" - Рәсәй почтаһының традицион хеҙмәтенә заявкалар ҡабул итеү башланды. Республика халҡы үҙе теләгән почта бүлексәһе аша, Ҡыш бабайҙан бүләк, тип рәсмиләштереп, туғандарына һәм яҡындарына хат йәки бүләк ебәрә ала. Һәр бер яңы йыл бүләгенә Ҡыш бабайҙан хат ҡушып һалына. Бөтә байрам ҡотлауҙары адресаттарға беренсе класс бандероле һәм заказлы хат менән ебәрелә. Заказ һаны квитанцияла яҙыла. "Ҡыш бабайҙан ҡотлау" хеҙмәтенең хаҡы һайланған бүләккә бәйле, 130 һумдан алып 1200 һумға тиклем булыуы мөмкин. Заявкалар 23 декабргә тиклем ҡабул ителәсәк.

✓"Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте" дөйөм Рәсәй ижтимағи-дәүләт ойошмаһы "Беренсе бөтә донъя һуғышында һәләк булған Рәсәй геройҙарына һәм яугирҙарына" һәйкәлен төҙөүгә аҡса йыйыу өсөн иҫәп асҡан. Башҡортостанда йәмғиәт битараф булмаған кешеләр ҙә изге эшкә үҙ өлөшөн индерә ала. Һәйкәлде 2014 йылдың 1 августында Мәскәүҙең Енеү паркында урынлаштырырға планлаштырыла. Иң яҡшы һәйкәл проектына конкурс булған. Жюри ҡарары нигеҙендә, Мәскәү символдарының береһе булып тораcаҡ һәйкәл проекты һайланған.

ШАНДАУ

# ВАРИҪТАРЫБЫҘ ҘА...

## тамырҙарын белһен, тип

**Быйылғы бер һанында "Киске Өфө" гәзите "Беҙҙең башҡорттарҙа шәжәрәнде, үҙендең ырыу-ара тарихыңды өйрәнеү менән ҡыҙыҡһыныу көсәйә бара. Был беҙгә нимә бирә?" тигән һорау ҡуйғайны. Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты студенттары ла башҡорт теле һәм телмәр мәҙәниәте дәрестәрендә был һорауға яуап эҙләне.**




"Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәре тураһында" һәм "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы (1999) закондарҙы тормошҡа ашырыуға ярашлы, Сибай институтының бөтә факультеттарында ла башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытыла. Башҡорт телен насар белгән, аңлап та, иркен аралаша алмаған башҡорт балаларынан һәм башҡа милләт вәкилдәренән тупланған башланғыс төркөмдәрҙә телдең грамматик төҙөлөшө өйрәнелһә, башҡортса яҡшы белгән студенттарҙан торған дауам итеүсе төркөмдәрҙә башҡорт халҡының тарихи үткәне, әҙәбиәте, мәҙәниәте, ата-бабаларыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәре тығыҙ бәйләнештә өйрәнелә. Билдәле, ҡоро грамматика өйрәтеү менән генә халҡыбыҙҙың үткәне һәм бөгөнгөһөнә ҡарата ихтирам, телгә һөйөү уятып булмай, иң тәүҙә кешене рухи яҡтан үстереү зарур. Тап ошо йүнәлештә дәрестәрҙә шәжәрәләр ҙә өйрәнелә. Башланғыс төркөм студенттарына, мәҫәлән, башҡорт шәжәрәләре тураһында дөйөм мәғлүмәт туплап килергә, һәр ырыу шәжәрәһенең үҙенсәлектәре тураһында сығыш әҙерләргә, шәжәрәләрҙә осраған легенда-риүәйәттәрҙе тикшерергә ҡушылһа, дауам итеүсе төркөм студенттарына иһә үҙ шәжәрәләрен төҙөп килергә ҡушыла.

Төрлө төркөмдәрҙә төрлө студенттар менән эшләргә тура килә. Ошо дәрес сиктәрендә генә лә уйланырлыҡ һығымталар яһарға була: ҡайһы бер яуаптар ҡыуандырһа, икенселәре әсендерә, ә ҡайһы берҙәре йөлләү тойғоһо уята...

Ҡатнаш ғаиләлә тәрбиәләнгән бер студент ҡыҙ, мәҫәлән, ғаиләһенә ҡайтып, атаһының шәжәрәһе менән ҡыҙыҡһынғас, атаһының шул тиклем ҡыуанып китеүе, бер ваҡытта ла уның шундай дәрт менән ихлас ярҙам итеүен күрмәүе тураһында һөйләне. Дөйөм мәғлүмәт туплау урынына ул дәрескә атаһы менән бергә әҙерләгән шәжәрәне тотоп килгән.

Башланғыс төркөмдәрҙең икенсеһендә бер студенттың әҙгәләнеүе йөрәкте әрнетте: ни өсөн егет башым менән мин дөйөм мәғлүмәт менән сикләнергә тейеш, мин бит шәжәрәне дауам итеүсе булырға тейешмен, тип сәмләнһә лә, ата-әсәһе үҙенең өс быуынын ғына иҫләй алған. "Һы! Үҙ шәжәрәм була тороп, башҡа ырыу шәжәрәләрен тикшереп ултырмаҫмын инде", кеүек сәмле һөйләм икенсе дәрескә "Өйҙәгеләр белмәгәнгә мин ғәйепле түгел инде..." тигәненә алышынды. Егеттең әсенеү тулы был яуабын ишетеү ҡыҙғаныс ине. Ысынлап та, кем ғәйепле һуң?

Ҡайһы бер студенттарҙың шәжәрәләрендә ырыу ағасының бер-ике ботағы ҡап-ҡара төҫкә буялғайны. Ниңә ҡороған ботаҡтар төшөрөүҙәре менән ҡыҙыҡһынғас, улар быны ҡатнаш никахтар арҡаһында нәҫелдәренең урыҫлашып китеүе менән аңлатты. Ысынлап та, шәжәрәләрҙә билдәләнгән ҡайһы Максим, Алеша, Игоректар нәҫел ағасын дауам итер икән? Шул урында ысын мәғәнәһендә "ботаҡ" ҡорой башлай шул. Студенттарҙың тапҡырлығына хайран ҡалырлыҡ!

**(Дауамы 6-сы биттә).**

ҺОРАУ - ЯУАП

### ПАСПОРТ БИРМӘҺӘЛӘР...

**Дуҫыма сит ил паспорты биреүҙән баш тарттылар. Был ғәҙелме?**

- Баш тартыу уның ниндәй сәбәпкә нигеҙләнгән булыуына бәйле, сөнки законда сит ил паспорты бирергә ярамаған сәбәптәр бар. Дәүләт хеҙмәте күрһәтеүҙән баш тартыла, әгәр кеше:

- айырыуса мөһим йәки дәүләт сере һаналған нығ йәшерен мәғлүмәттәргә йәләп ителһә, Рәсәй Федерацияһынан сығыуҙы сикләгән (дәүләт сере менән танышҡандан һуң 5 йылға тиклем) хеҙмәт контракты төҙөгән булһа;
- хәрби хеҙмәткә саҡырылһа йәки альтернатив гражданлыҡ хеҙмәтенә ебәрелһә;
- шик аҫтында тотолһа йәки ғәйепләнеүсе сифатында яуапҡа тарттырылһа;
- енәйәт ҡылған өсөн хөкөм ителгән булһа;
- суд тарафынан йөкмәтелгән бурыстарҙы үтәүҙән тайпылһа;
- сит илгә сығыу өсөн документтар тултырғанда үҙе хаҡында күрәләтә ялған мәғлүмәттәр бирһә;
- федераль хәүефһеҙлек хеҙмәте органдарында эшләһә.

Балиғ булмаған үсмерҙең ата-әсәһе, уллыҡҡа йәки опекунлыҡҡа алғандарҙың береһе уның сит илгә сығыуына ҡаршы булһа, шулай уҡ паспорт бирелмәй. Әгәр танышығыҙға әле һанап кителгән сәбәптәрҙән башҡа нигеҙҙә паспорт биреүҙән баш тарталар икән, Федераль миграция хеҙмәтенең төбәк начальнигына мөрәжәғәт итегеҙ.

### БАГАЖЫҢДЫ ҺАҠЛА

**Юлда йыш йөрөйөм, бер нисә тапҡыр сумкаларымды, хатта ҡунаҡхананан әйберҙәремде юғалттым. Әле ялға йыйынам. Багажды страховкалау тураһында аҙһағыҙ ине.**

- Шәхси әйберҙәрегеҙҙе ял итеү ваҡыты бөткәнгә тиклем страховкалай алаһығыҙ. Бындай страховка хаҡы әйберҙәрҙең хаҡына ҡарап, һәр осраҡта айырым билдәләнә. Икенсе яҡтан, әйберҙәрегеҙ хаҡы ҡиммәт икән, ябай багаж хаҡынан күпкә артығыраҡ аҡса сығарырға тура киләсәк. Унан һуң, багаж юғалған хәлдә компенсация һеҙҙең һүҙҙәргә ҡарап түләнмәйәсәк, шуға күрә урлау йә зыян күреүҙе документтар нигеҙендә раҫларға кәрәк буласаҡ. Полиция протоколдары һәм ҡунаҡхананан әйберегеҙ юғалыу хаҡында документығыҙ булһын.

### ИНТЕРНЕТТАН - ПОЕЗҒА

**Поезға билетты интернет аша һатып алам, ләкин принтерым юҡ. Һуңғы ваҡыт күп поездарҙа электрон теркәү барлыҡҡа килде, шуға күрә поезға ултырғанда ҡағыҙ билеттың кәрәге бармы икән?**

- Электрон теркәү пассажирға юл йөрөгәндә поезға ҡәҙимге кассанан һатып алынған ҡағыҙ билетһыҙ ултырыу хоҡуғын бирә. Әгәр һеҙ Рәсәй тимер юлдары(РЖД) сайтында ниндәйҙер поезға электрон теркәлеү үткәнһегеҙ икән, вагонға инеп ултырыу өсөн проводникка билет һатып алыуға заказ биргәндә күрһәткән шәхесегеҙҙе таныҡлаусы документ менән принтерҙан сығарылған йәки кеҫә телефонына йә планшетҡа күсермәһе төшөрөлгән махсус купон (посадочный) күрһәтергә тейеш булаһығыҙ. Проводник ҡайһы саҡ тик паспортты ғына һорай, шулай ҙа электрон билетығыҙҙы раҫлаусы бронь үҙегеҙ менән булһын.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Гастрит

**Киҫкен гастрит:** 1 ҡалаҡ етен орлоғона 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә ике тапҡыр - иртәнсәк ас ҡарынға һәм кисен йоҡлар алдынан берәр стакан эсергә.

**Хроник гастрит:** ❖ 100 грамм алоэ һутын 100 грамм бал менән болғатырға. Көнөнә өс тапҡыр ашар алдынан 1-әр балғалаҡ ҡабул итергә. Гастрит һәм ашҡаҙандың сей яраһынан дауаланыу өсөн уны 3 аҙна ҡабул итергә.

❖ Өс литрлы банкаға 200 грамм андыҙ тамырын ваҡлап һалырға, 2,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға, бүлмә температураһына тиклем һыуытырға һәм 1 стакан шәкәр, 1 стакан ҡомалаҡ сүпрәһе өҫтәргә. 3 тәүлек йылы урында тоторға, һөҙөп алырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан яртышар стакан эсергә.

**Түбән әселекле гастрит:** ❖ керәнде ҡырғыстан үткәреп, шәкәр йәки бал өҫтәгеҙ. Ашар алдынан берәр балғалаҡ ҡабул итергә.

❖ юл япрағы әселекте нормаға килтерә, шешеү процесын баҫа. Яңы ғына әҙерләнгән һутын көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан ярты сәғәт 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Шул рәүешле ике ай туҡтамайынса дауаланырға. Тағы ла көслөрәк ысул: 1 кг быйылғы балға 250 грамм юл япрағы һуты, 150 грамм алоэ һуты ҡушып болғатып, һыуытҡысҡа ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡлап ҡабул итегеҙ.

❖ Һары мәтрүшкә, шиңмәҫгөл, кукуруз емешлеге, гөлйемеш емештәре (уларҙы ваҡлап ҡулланырға), меңъяпраҡ, аҡ сәскә, бөтнөк, календула, бесәй үләне тамырын бер тигеҙ алып, болғатырға. Ярты ус үләнгә 1 литр һауыҡ һыу ҡойоп, төнө буйы төнәтергә. Иртән ҡайнау хәленә килтерергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң ярты сәғәт үткәс, яртышар стаканлап эсергә. Дауаланыу курсы ике ай.

**Юғары әселекле гастрит:** 20 грамм - бөтнөк япрағы, 10 грамм - эт муйылы ҡайырыһы, 20 грамм - һары мәтрүшкә, 30 грамм - күгүлән, 20 грамм - меңъяпраҡ, 30 грамм - юл япрағы, 40 грамм - аир үләне тамыры, 20 грамм - эт ҡолаҡ үләне тамырын бергә бутарға. 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 40 минут алда яртышар стакан эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

БАҪЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

## БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Осоҡтан им

Лингвистик күҙлектән ҡарағанда, осоҡ һүҙенең бер нисә мәғәнәлә ҡулланылыуы билдәле. Беренсенән, ул ауырыу эйәһе, икенсенән, осоҡлап ташланған ҡурсаҡ, кейем-һалым, тауыҡ. Шулай итеп, ауырыу үҙе һәм ул күскән предмет бер исем менән, йәғни осоҡ тип атала.

Осоҡ һүҙенән осоҡсо, осоҡлаусы, осоҡлау һүҙҙәре яһалған һәм уларҙың барыһы ла им-том менән бәйле. Был һүҙҙәрҙән тыш, ауырыу мәғәнәһендә ошо уҡ тамыр менән осоноу, осан, осонған һүҙҙәре осрай. Ғәҙәттә, ирен, тел, тән осоноуҙарын да нин-дәйҙер ен, шайтан үбеүе, ялауы менән аңлаталар. Уларҙы ла магик ысул менән бөтөрөргә тырышалар. Мәҫәлән, тел осонғанда: "Телем осонған, те-лем осонған, бесәй артын үп, тфү, тфү, хайран те-лем хур булды, хур булды!" тип, өс тапҡыр әйтеп имләйҙәр.

Шулай итеп, осоҡ, осоноу һүҙҙәренең мәғәнәүи яҡтан яҡынлығы күренә.Фонетик һәм морфологик күҙлектән дә осоҡ һәм осоноу араһында уртаҡлыҡ бар.

Был һүҙҙәрҙең уртаҡлығын иҫбатлар өсөн боронғо төрки һүҙлеккә мөрәжәғәт итәйек. Унда учуҡ һүҙе менән осоноуҙы аңлатҡандар. Был һүҙлектә тапма ауырыуы учык-йелпик тип бирелгән. Хәҙерге төрки телдәрҙән учук теге йәки был ауырыуҙың атамаһы булып, әзербайжан, төрөк, төркмән, ҡырғыҙ, үзбәк, уйғыр, ҡаҙаҡ телдәрендә осрай. Төрки телдәрҙән тыш, учук һүҙе тажик телендә бар. Өҫтә иҫкә алған телдәрҙә учук һүҙе ирен осоноу, ҡан боҙолоу арҡаһында барлыҡҡа килгән тәндәге күк таптар, тәнгә сыҡҡан ҡыҙыл таптар, тәндең сабыртып сығыуы, быума, ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙары, уремия һ.б. мәғәнәлә ҡулланыла.

Ҡырғыҙ телендә учук һүҙе ҡайры учук - шештең төрө, курчак учук - туберкулез, аҡ учук - кешене ябыҡтырыр билдәһеҙ ауырыу кеүек ауырыуҙар атамаларында осрай. Ҡырғыҙ телендә учукта тигән этнографик термин да бар. Уның мәғәнәһе - ауырыуҙы боҫ менән, йәғни ҡыҙған тимергә һыу һибеп, боҫо менән дауалау. Шул уҡ ваҡытта учукта һүҙе ҡурҡытып дауалау мәғәнәһендә лә ҡулланыла.

Төркмәндәрҙә дауалау өсөн ҡорбанға килтерелгән мал учук тип йөрөтөлә. Шулай итеп, осоҡ, учук һүҙҙәре төрки телдәрендә киң таралған. Уларҙың мәғәнәләре бик яҡын йәки бөтөнләй тура килә.

Төрки телдәрендә учун тигән һүҙ ҙә бар. Уның төп мәғәнәһе Э.В.Севортян һүҙлеге буйынса, кешенең быуылып йығылыуы, ҡапыл ҡурҡып ҡысҡырыуы, тәнгә сабыртма сығыуы.

Шулай итеп, учуҡ, учук һүҙҙәренең нигеҙендә уч, йәғни ос тигән тамыр ята. Ошонан сығып, башҡорт теленең осоҡ, осоноу һүҙҙәрендә лә шул уҡ ос, йәғни осоп сығыу, ослайып тороп күтәрелеү мәғәнәһендә ҡулланылған ос тамыры ята, тип фараз итергә була. Әйтеп китергә кәрәк, ошо уҡ тамыр бәлки осраҡ, осрау һүҙҙәрендә лә яталыр. Сөнки мәғәнәүи параллель ныҡ һиҙелә. Осоҡ, осоноу ҙа осраған, табылған, көтөлмәгән, уйланмаған ауырыу.

**Эт имсәген имләү.** Эт имсәге - ул ҡултыҡ аҫтына сыға торған шешек. Уны тәрләсә имләргә мөмкин. Мәҫәлән, эт имсәге сыҡһа, бер телем икмәкте алып, шешеккә тейҙерә-тейҙерә ошо әпсенде әйтеп имләйҙәр:

*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9 - туғыҙҙан ҡайтһын,*
*Туҙанға, тупраҡҡа китһен.*
*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7 - етенән ҡайтһын,*
*Елгә-куҙға китһен.*
*1, 2, 3, 4, 5 - биштән ҡайтһын,*
*Биш юл сатына китһен.*
*1, 2, 3 - өстән ҡайтһын,*
*Осһон, бөтһөн.*
*1 - берҙән ҡайтһын.*
*Минең ҡулым түгел,*
*Ғәйшә, Фатима ҡулы.*

Им-том иткәс, был икмәкте эткә ташлайҙар. Ышаныуҙар буйынса, ауырыу эткә күсә икән.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

ШАҢДАУ

# ВАРИҪТАРЫБЫҘ ҘА...

## тамырҙарын белһен, тип

**(Башы 5-се биттә).**

Шулай ҙа үҙ тамырҙарын ныҡлы белгән студенттар ҙа булды. Шундай ҡыҙыҡлы сығыштарҙың береһен "Дөйөм биология" бүлегендә белем алыусы 1-се курс студенты Зөлхизә Яҡупова әҙерләгәйне. Ул үҙенең 14 быуынын белә булып сыҡты. Үҙенең сығышында ул Суҡмар араһынан, Сура батыр тоҡомонан булыуын билдәләне һәм үҙҙәренең шәжәрәһе буйынса тупланған ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән таныштырҙы, билдәле шәхестәре тураһында ентекле һөйләне. Суҡмар араһының атамаһы Сура батырҙың һуғыш ҡоралы - суҡмар менән бәйле икән. Сура батыр үлгәс тә, уның варисҭары был суҡмар менән дошмандарҙы туҡмаған, шуға күрә уларҙы Суҡмарҙар араһы тип атағандар. Артабан Зөлхизә Яҡупова олатайҙары тарафынан яҙып ҡалдырылған башҡа материалдар менән таныштырҙы. Студенттарҙы иң ҡыҙыҡтырғаны 1903-1905 йылғы Рус-япон һуғышы яугиры Ғималетдин Яҡупов тураһындағы тарих булды:

Ике метрлыҡ оҙон буйлы, мөһабәт кәүҙәле, көслө Ғималетдин рус-япон һуғышында разведчиктар отрядына эләгә. Бер ваҡыт өс разведчик, улар араһында Ғималетдин Яҡупов та була, дошман тылына китә. Текә, яланғас тау әллә ҡайҙарға йәйелгән була. Ике һалдат тау башынан атлай, ә башҡорт егете аҫтан, тау битләүендәге юлдан бара. Иптәштәренең: "Якупов, прощай!" - тигән һүҙҙәренән албырғап ҡалған Ғималетдин ни булғанын уйлап өлгөргәнсе, уны дүрт япон һалдаты уратып та ала. Ҡыуып алып китәләр егетте. Япондарҙың ҡулында - араҡы шешәһе, уртлай-уртлай баралар. Ғималетдингә ла тәҡдим итәләр, ул баш тарта, ә үҙе дошман һалдаттарының әкренләп иҫәрә барыуын күреп, күҙ ҡырыйы менән генә тегеләрҙе күҙәтә. Бер аҙ барғас, тәүәккәл егет ҡапыл алдараҡ килгән дошман һалдатына ырғый, уның штыклы мылтығын тартып алып, ике дошманды сәнсеп үлтерә, икәүһен мылтыҡ төйҙәһе менән иҫәңгерәтә һуға. Шулай итеп, часҡа "тел" менән ҡайта Ғималетдин. "Һине әсирлеккә алғандар, нисек ҡотола алдың?" - тип ышанмай торалар. Егет үҙе менән буған хәлде һөйләп бирә. Әсирлеккә төшкән япон һалдаттары бик ҡиммәтле мәғлүмәт бирә. Ә Ғималетдиндың күкрәгенә, быға тиклем алып өлгөргән бронза Георгий тәреһе эргәһенә, көмөшө өҫтәлә. Полк командиры уға үҙенең алтын сәғәтен бүләк итә, һәнә егерме биш һум аҡса ла бирәләр ҡыйыу разведчикка.

Бер мәл бер тауҙы ала алмай, ете көн, ете төн алыша беҙҙең һалдаттар япондар менән. Йоҡо ла, ал-ял да юҡ. Ғималетдин ағас төбөнә ышыҡланып, дошманды күҙәткәндә йоҡлап китә. Төш күрә: имеш, япон һалдаты эргәһенә уҡ килеп баҫҡан... Уянһа, тау башынан уларға табан япондар ябырылышып килә. Ҡулбашына эләккән пулянан Ғималетдин тәгәрәп китә. Эргәһендәге иптәше уны салғыйынан һөйрәп, аҫҡа табан шыуыша. Аҙмыҡүпме ваҡыт үткәндән һуң, япондар менән килешеү төҙөлә. Ғималетдинды Порт-Артурҙан Петроградҡа госпиталгә оҙаталар. Вагонға киндер туҡыманан сәңгелдәк аҫып, егетте шунда һалалар, сөнки ултырып та, ятып та барыр әмәле булмай. Яраһы ул арала ҡортлай башлай. Тәҙрәнән тышты күҙәтеп барған яугир иҫен юғалта. Госпиталдә Ғималетдинды моргҡа сығарып ташлайҙар. "Бер заман күҙҙәремде асып ебәрһәм, ян-ягым тулы үлектәр. Дер ҡалтырата, һыуыҡ", - тип хәтерләр булған һуңынан яу батыры. - Ярай әле, шинелде һалдырып өлгөрмәгәндәр". Бөтә көсөн туплап, яралы һалдат моргтан сығыу яйын ҡарай. "Һин иҫәнме ни?" тип иҫтәре китә госпиталь хеҙмәткәрҙәренең. Уны дауалай башлайҙар. Быңа шунда осраша ла инде Ғималетдин Николай II менән. Батша ҡаһарман башҡорт егетен үҙ госпиталенә күсертә. Баһадир кәүҙәле һалдат һауыҡҡас, бер йылға яҡын Николай II батшаның һағында хеҙмәт итә. "Батша һанаттарын йыйғанда ишек төбөнә һаҡҡа гел мине ҡуйҙылар," - тип һөйләгән аҙаҡ балаларына Ғималетдин Яҡупов. "Ғаиләңде бында алдырайыҡ, тулыһынса дәүләт ҡарамағында булырһың", - тиһәләр ҙә, ул баш тарта.

Аҙаҡ Япон һуғышының 64 батырын Ҡышҡы һарайға бүләкләүгә йыялар. Урамда халыҡ эркелешә. Кешеләрҙе үткәрмәҫ өсөн ике яҡлап тимер селтәр һуҙалар. Батырҙарҙы түргә ултырталар. Батша һәр ҡайһыһының алдына орден һалып сыға, ә батшабикә, ике ҡыҙын эйәртеп, наградаларҙы һалдаттарҙың күкрәгенә тағып йөрөй. Һуңынан дүрт сәғәтлек мәжлес ойошторола. Музыка уйнап тора, өҫтәлдә - йәнең теләгән ризыҡ-тәғәм. "Бер сәғәттәй ҙә тойолманы шул мәжлестәре", тип һағынып та, үҙенең бөтөнләй башҡа донъяны күреү бәхетенә ирешеүенә аптырай биреберәк тә һөйләр булған Ғималетдин олатай. Алтын Георгий тәреһенә Ғималетдин Яҡупов шул саҡта лайыҡ була.

Тыуған яҡтарына имен-аман әйләнеп ҡайтҡан яугир кәләше менән матур ғына йәшәп алып китә. Ғималетдин оҫта ҡурайсы булған, моңо менән бөтәһен дә таң ҡалдырған. 1907 йылда булһа кәрәк, Ғималетдин олатайға тарантас арбаға ат еккән ике ят кеше килә. Улар арбанан һандыҡ һөйрәп төшөрәләр. Эсе тулы кейем-һалым. Һабыны ла бар. Тик эстәге йоҙағын ҡуптарып алып бөткәндәр. Батшанан бүләк, тиҙәр ҙә тегеләр ҡайтыр яҡҡа боролалар. Һандыҡты район үҙәгендәге төбәкте өйрәнеү музейы хеҙмәткәрҙәре XX быуат аҙаҡтарында бер әсмүхә сәйгә алмаштырып алып китә.

Ҡаһарман яугир лайыҡ булған Георгий тәреләренең яҙмышы ла ҡыҙыҡлы. Рысҡужа ауылынан дүрт саҡрым ғына алыҫлыҡта Рәмиевтар приискыһы булған. 1921 йылғы йотлоҡта Шакир Рәмиев, дүрт бот он биреп, Ғималетдин Яҡуповтың алтын тәреһен алып китә. 1873 йылда донъяға килгән Ғималетдин Яҡупов 1955 йылда вафат була".

Үҙ шәжәрәләре тарихы тураһында һөйләгән Зөлхизә Яҡупованың да, башҡа студенттарҙың да йөҙөндә ғорурлыҡ саҡҡылары балҡый ине. Улар үҙҙәренең ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс сығыштары менән бөтә аудиторияны арбаны. Уларҙың сығыштарына һоҡланыу ҡатыш көнләшмәслек тә түгел ине - ҡулдарында шундай байлыҡ! Әлбиттә, был һәр нәҫелдең зыялыларының, шәжәрәләрен бөгөнгә көнгә еткереүселәрҙең хеҙмәте. Уларға оло хөрмәт менән баш эйергә генә ҡала. Ә йәштәргә ошо байлыҡты киләһе быуындарға мираҫ итеп ҡалдырыу, аманат итеп еткереү бурысы йөкмәтелә. Беҙҙең вариҫтарыбыҙ ҙа үҙҙәрен ышаныслы, ғорур тойһон өсөн, халҡыбыҙҙың тарихы онотолмаһын өсөн!




**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА, Сибай институты уҡытыусыһы.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**XVIII быуаттың 30-40-сы йылдары башҡорт тарихының бик ҡанлы, бик фажиғәле осоро: властарҙың аңлайышһыҙ сәйәсәте, ғәйепһеҙҙәрҙе ғәйепләү, уларға яуап итеп бер-бер артлы ҡупҡан ихтилалдар, ихтилалдарҙы ҡаты баҫтырыу, башҡорттарҙы тереләй яндырып, ауылдарынан көл генә торғоҙоп ҡалдырған Тевкелев (Тәфтиләү) кеүек мәкерле кешеләрҙең яуызлыҡтары. Ләкин нимәнән башланып китә был сыуалыштар? Уларҙың эске һәм тышҡы сәбәптәре ниҙә? Рәсәй дәүләтенең башҡорттарға ҡарата сәйәсәтенең үҙенсәлеге нимәлә? Был һорауҙарға яуапты тарих фәндәре кандидаты, БДУ доценты Марат Миңлеғәле улы ЗӨЛҠӘРНӘЕВ сығышында табырһығыҙ.**



# ИХТИЛАЛДАРҒА...

## мәжбүр иткән сәбәптәр

### XVIII быуаттың 30-40-сы йылдарында Рус дәүләтенең башҡорттарға ҡарата сәйәсәте

Башҡорттар Рус дәүләтенә ирекле рәүештә ҡушылғанға күрә, ҡайһы бер ташламаларға эйә була. Мәҫәлән, жалованная грамота уларҙың аҫабалыҡ хоҡуҡтарын һаҡлай. XVII-XVIII быуат башында ла башҡорттар был хоҡуҡтарын юғалтмай әле. Башҡорттар походтарҙа даими ҡатнашып, үҙҙәренең тоғролоғон даими иҫбатлап тора.

Рус дәүләтенең 30-40-сы йылдарҙа башланып киткән яңы сәйәсәтен тап башҡорттарға ҡаршы эшләнгән сәйәсәт тип тә әйтеп булмай. Әммә геосәйәси майҙанда барған үҙгәрештәр башҡорттарға ла ҡағылмай үтмәй. Хатта XVIII быуаттың 20-30-сы йылдарында башҡорт халҡына ҡағылышлы махсус хеҙмәттәр ҙә барлыҡҡа килә. Шуларҙың береһенең авторы Урал заводтарын етәкләүсе Василий Татищев була. Ул 1724 йылда "Башҡорт ихтилалдарының сәбәптәре һәм уларҙы бөтөрөү" тигән ҙур ғына хеҙмәт яҙа. Унда ул күтәрелештәрҙең сәбәптәрен асыҡлап китә. Уның билдәләүенсә, иң төп сәбәп - ул башҡорттарҙың берҙәм халыҡ булыуы. Йыл һайын йыйынға йыйылып, башҡорттар ер, поход һәм сәйәсәткә ҡағылышлы төрлө мәсьәләләрҙе күтәрә. Көнүҙәк мәсьәләләр буйынса ҡабул ителгән ҡарарҙар башҡорт халҡының бар ырыуҙарына ла тиҙ үк таратыла, уртаҡ ҡарарҙар ҡабул ителә. Бынан тыш, йыйындар дәүләтселектең, берҙәмлектең бер формаһы ла була. Бар ошо факторҙарҙы анализлап, Татищев уларҙы, зыянлы, тип таба.

Икенсенән, тип билдәләй Татищев, башҡорттарҙы һалдат отрядтары менән баҫтырыу мөмкин түгел. Сөнки улар Яйыҡ аша Ҡаҙағстан далалаларына китә һәм шунда ышыҡ таба. Башҡорттар далалағы ел кеүек, уларҙы күреп тә, тотоп та булмай. Шулай уҡ Татищев башҡорттарҙың рус телен һәм Рус дәүләте ҡабул иткән закондарҙы ныҡлап белмәүен, үҙ закондары буйынса йәшәүен дә билдәләй. Башҡорттарҙы тамам буйһондороу өсөн ул шундай алымдар тәҡдим итә:

-Башҡортостанды бер-нисә административ өлкәләргә бүлергә.

-Өфөлә генә түгел, башҡа ҡалаларҙа ла суд системаһы ойоштороорға.

-Ҡалалар, ҡәлғәләр, заводтар төҙөргә. Бының өсөн башҡорттар үҙҙәренең ерҙәрен ирекле рәүештә бирмәһә, уларға, был ерҙәр Петр I-гә Себергә юл төҙөү өсөн кәрәк, тип аңлатырға.

-Төҙөлгән ҡәлғәләрҙән административ өлкәләр ойошторорға.

-Башҡорттарҙы христиан диненә яҡынлаштырырға. Бының өсөн урыҫ телен өйрәтергә. Урыҫ телен өйрәнгән башҡорттарға административ вазифалар бирергә. Татищев уйлауынса, был аҙымдар Башҡортостандың Рәсәй дәүләтенә тулыһынса буйһоноуына булышлыҡ итәсәк.

Шулай уҡ XVIII быуаттың 30-сы йылдарында Ҡаҙан губернаһын етәкләүсе Артем Петрович Волынский ҙа башҡорттарға ҡағылышлы үҙ хеҙмәтен тәҡдим итә. Ул Анна Ивановна идара иткән осорҙа министр дәрәжәһенә тиклем күтәрелә. Ләкин дәүләткә ҡаршы заговорҙа ғәйепләнеп, батшабикә тарафынан язалана. 1730 йылдар тирәһендә яҙған башҡорттар тураһындағы хеҙмәтендә Волынский ҙа башҡорт ихтилалдарының сәбәптәрен уларҙың берҙәмлегендә күрә. Хәҙер башҡорттарҙың һаны арта бара, ти ул. Уларҙы кәметеү өсөн нимә эшләргә? Волынский тәҡдим итеүенсә, башҡорттарҙы Урта Азия, Ҡаҙағстан, Һиндостанға хәрби походтарға ебәрергә кәрәк. Ул саҡта был халыҡ эске сәйәсәттән айырыласаҡ, үҙенең йолаларын онотасаҡ, тип билдәләй ул.

### Был осорҙа Рәсәйҙең Көнсығыш йүнәлешендәге сәйәсәте

Башҡортостан тарихы хаҡында һөйләгәндә уны Рус дәүләте тарихынан, донъя тарихынан айырып булмай. Ниндәй процестар бара ул ваҡытта Рус дәүләтендә, донъяла? XVIII быуат башы "Европаға тәҙрә асыусы" Петр I реформалары менән билдәле. Рәсәй Швецияны Төньяҡ һуғышында еңеп, ҙур империяға әйләнә. Күп тарихсылар Петр I-ҙең Көнбайыштағы сәйәсәтен генә өйрәнә. Был дөрөҫ түгел. Ни өсөн тигәндә, Петр I идара иткән йылдарҙа Көнсығыш илдәренә лә ҡыҙыҡһыныу көслө булыуын беләбеҙ. Ул Фарсы илдәре менән мөнәсәбәттәр ҡоророға ынтыла. Быуат башында Көнсығышҡа бер нисә экспедиция ойоштора. Ҡытайға дүрт тапҡыр илселәр ебәрә. Сәйәхәтсе Бухгольцтың, кенәз Бекович-Черкасскийҙың 1716 йылда Хиваға экспедициялары билдәле.

1723 йылда Фарсы походынан ҡайтышлай, Петр I Әстерханда туҡтай, Алексей Иванович Тевкелев менән күрешә. Ул Тевкелевҡа: "Минең ҙур теләк бар. Әгәр ҙә беҙҙең Петербург Европаға тәҙрә икән, ул саҡта Урал яғы (Ырымбур) Көнсығышҡа ҡапҡа",- тип әйтә. Уның хыялы Көнсығыш илдәренә барып етеү һәм улар менән мөнәсәбәттәр урынлаштырыу була. Ни өсөн был мөнәсәбәттәр кәрәк була һуң Рус дәүләтенә? Беренсенән, XVIII быуат ғилемдең үҫеш алған осоро була. Етмәһә, үҙҙәрен хөрмәт иткән Европа илдәре әүҙем рәүештә үҙ колонияларын булдыра, яңы ерҙәр яулап ала (был идея Петр I-гә лә хас була). Икенсенән, Рәсәйҙә мануфактура, сәнәғәт ныҡ үҫешеп китә. Тик Рәсәй тауары Европала етештерелгән тауарҙар менән ярыша алмай. Яңы баҙар кәрәк була. Был етешһеҙлекте Азия илдәре менән мөнәсәбәттәр яҡшыртыр ине, тип уйланыла. Шулай уҡ мануфактураға сеймал да, тимер, йөн дә кәрәк була һ.б. Өсөнсөнән, был ваҡытта халыҡ араһында ла, юғары ҡатламдарҙа ла, Көнсығыш илдәре ныҡ бай, тигән уйҙырмалар йөрөй. Һәр бер ханда йөҙәр бот алтын, бихисап ҡиммәтле таштар, башҡа байлыҡ күп, тип уйлай урыҫтар. Был байлыҡтарҙы яйлап ҡына үҙләштерергә кәрәк, тигән йүнәлештә алып барыла ла инде бар сәйәсәт.

Башҡорттарға был нимәһе менән ҡағыла? Билдәле булыуынса, ҡаҙаҡтар өс жүзгә бүленеп йәшәй: Кесе, Урта, Оло жүздәр. Әбүлхәйер хан Кесе жүз менән идара итә. Уларға күрше йәшәгән джунгарҙар, йәғни ҡалмыҡтар дәүләте был ваҡытта ҙурая, көсәйә башлай. Көсәйгән һайын Әбүлхәйер хандың ерҙәрен үҙләштерә, ҡаҙаҡтарҙы Яйыҡ буйына ҡыҫырыҡлай башлайҙар. Хан бер нисә тапҡыр Рәсәйгә мөрәжәғәт итә, ярҙам һорай. 30-сы йылдарҙа ғына ҡаҙаҡтарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуы башлана. Был процесса башҡорттарҙың роле лә ҙур була. Ҡаҙаҡтарҙы батшабикәгә алып барған делегацияла Алдар Иҫәнгилдин (Иҫәкәев), Таймаҫ Шәимов, Ҡыҙрас Муллаҡаев, Әбәс мулла кеүек башҡорт тархандары була. Ҡаҙаҡтар джунгарҙарҙан ҡыҫырыҡланған һайын Яйыҡҡа яҡынаясаҡ һәм башҡорт ерҙәренә дәғүә итә башлаясаҡ, тигән хәүеф башҡорттарҙың был эшкә булышлыҡ итеүенең төп сәбәбе була.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ яҙып алды.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Саҡматашлы саҡма һәм ҡыу ярҙамында ут тоҡандырыу шырпы барлыҡҡа килгәнгә тиклем ҡулланылған, ә XIX быуаттың аҙағында күсмә тормош алып барған башҡорттарҙа һәм тауҙарҙа һунар итеүсе һунарсыларҙа ғына осраған.

Төрлө материалдарҙы эшкәртеүгә килгәндә, башҡорттар минераль матдәләрҙе эшкәртеү менән һирәк булышҡан. Башҡорттарҙан көньяҡ-көнсығышта йәшәүсе күсмә халыҡтар ҙа, төньяҡ-көнсығышта көн күргән Обь йылғаһы бассейнының ултыраҡ тормош алып барыусылары ла был осорҙа күптән балсыҡ һауыт-һаба менән ҡулланмаған, сөнки уны тимер алыштырған. Ауыр, тиҙ ватылып барыусан балсыҡ һауыттар күсенеп йөрөү өсөн бигерәк уңайһыҙ булған. Күсмә йәшәү рәүеше алып барыусылар - тире йәки металл, ярым күсмә тормошта йәшәүсе һунарсылар, балыҡсылар туҙ һәм металл һауыт менән ҡулланған. Кама буйындағы ерле халыҡта балсыҡ һауыт һаҡланып ҡалған, ә башҡорттар ағас һауытҡа өҫтөнлөк биргән. Шулай итеп, башҡорттар үҙҙәре менән бер төбәктә йәшәүсе рус һәм фин-уғыр халыҡтарынан көнкүрештәрендә керамика ҡулланмауҙары менән айырылып торған.

Бына металл эшкәртеү эше башҡорттар араһында киң таралған. Рус дәүләтенә ҡушылғанға тиклем әллә күпме ваҡыт алда улар тимер уҡ башаҡтары, һөңгөләр, бысаҡ һәм башҡа кәрәк-яраҡтар, һуңғараҡ иһә ҡорал да яһаған. Уларҙың мәғдәнлек менән шөғөлләнеүен раҫлаусы материалдар ҙа бар. XVIII быуаттың аҙағында И.Г. Георги башҡорттарҙың мәғдәнде таныуы, уны ер аҫтынан таба белеүе тураһында яҙа. Ошо уҡ автор башҡорттарҙың мәғдән табыу урындары булыуы һәм уларҙың баҡыр мәғдәнен хаҡы буйынса файҙалыраҡ булған заводтарға алып барып тапшырыуҙарын билдәләп китә. Екатерина II батшабикәгә яҙылған докладтарға ҡарағанда, Башҡортостанда мәғдән эше менән шөғөлләнеүсе башҡорт сәнәғәтселәре лә була, мәҫәлән, "Исмәғил Тасимов үҙенең иптәштәре менән көньяҡта урынлашҡан баҡыр иретеүсе заводтарҙы мәғдән менән тәьмин итә".

XVIII быуаттың тәүге яртыһында башҡорт ауылдарында тимерлектәр иҫәбе шул тиклем күбәйә, хатта 1735-1736 йылдарҙағы ихтилал мәлендә 1736 йылдың 11 февралендә сыҡҡан махсус указ менән башҡорттарға үҙ тимерлектәрен тотоу тыйыла. Һөҙөмтәлә, тимерселек эше һүрелә һәм XIX быуаттың аҙағына башҡорт тимерлектәрен осратыуы ауыр була.

Шул уҡ ваҡытта, башҡорттарҙа тимер эшкәртеү эше ни тиклем таралған һәм ниндәй юғарылыҡта тороуын беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған әйберҙәр күрһәтә. Ябай көнкүреш әйберҙәренән тыш, тимергә көмөш биҙәктәр һалып эшләнгән ҡорал, ат сбруйы осратырға булған. Боронғо ағас уҡ-һаҙаҡтарҙы, йәйәләрҙе оҫта ҡулдар семәрле тимер биҙәктәр менән биҙәгән. XX быуат башына бындай оҫталар бөтөнләй ҡалмаған.

✓ ***Беҙ быйыл республиканың аҡһаҡалдар ҡоро менән бергә ер хужаларының йыйынын үткәрергә уйлайбыҙ. Беҙҙе пай ере бирәбеҙ тип, асылда, танытма биреп кенә алданылар. Хәҙер иһә ул танытмаларҙы ваучерға әйләндерергә итәләр.***

# АУЫЛЫҢА ҺАТ... барып ултырырһың"



ниндәйҙер мөғжизәгә ышаныу бер ҡатлылыҡ булыр ине, моғайын. Ауылдың хәлен аңлап етмәйҙәр әле, шуға аптырайым. Ауылды күтәреү өсөн крәҫтиән, фермер хужалыҡтарын аяҡҡа баҫтырырға кәрәк, тиҙәр. Улар тауар етештерә лә ул, әммә уны һата алмай, һатҡан осраҡта ла арзан ғына биреп ебәрергә мәжбүр була. Шуға күрә ауыл халҡы етештергән продукцияны һатыу мәсьәләһен район хакимиәте кимәлендә хәл итергә кәрәк. Ауыл халҡының бөгөн ите лә, һөтө лә, майы ла бар, тик баҙар юлдары бик таҡырҙан түгел.

**Рауил ЙӘНСУРИН, Темәс ауыл биләмәһе башлығы:** Милләтенең патриоты булған кеше Әхмәр Үтәбайҙың был мәҡәләһен тыныс күңел менән уҡый алмағандыр, тием. Беҙ әле ер мәсьәләһенең ни тиклем киҫкен торғанлығын бар тулылығында аңлап та бөтмәйбеҙҙер. "Ситно" беҙҙең ерҙәрҙе алып бөткән генә еренән район хакимиәте башлығы булып ҡайтҡан Илшат Ситдыҡов быға юл ҡуйманы, дөрөҫөрәге, әгәр ҙә ул булмаһа, ерҙәребеҙ киткән булыр ине. Әгәр ҙә улар беҙҙең ерҙәргә хужа булһа, беҙҙең аттарыбыҙҙы, һыйырҙарыбыҙҙы автомат менән атырҙар ине. Капитал туплау донъяһы ана шундай шарттарға ҡоролғанын телевизор аша бик яҡшы беләбеҙ. Ундай өлгөләр Силәбе, Ырымбур өлкәләрендә бар. Бөгөн "Ситно" беҙҙең ерҙәргә яҫҡыныуы һөҙөмтәһендә элеваторҙан ҡолаҡ ҡаҡтыҡ һәм тап шул арҡала йыйған уңышыбыҙҙы һаҡлай ҙа, эшкәртә лә алмайбыҙ. Иҫегеҙҙә булһа, "Һәүәнәк" совхозын банкрот тип иғлан иткәс, тышҡы идарасы булып, бер курд кешеһе килгәйне, унан һуң әрмән кешеһе килде, әзербайжан да килеп ҡараны. Тик улар совхозды күтәреү буйынса бер ни эшләмәне. Улар хатта атышыуға барып еттеләр. Уларҙың береһе Өфөлә ресторанда ултырғанда: "Мин Башҡортостандың беренсе баш ҡалаһының ерен һатып алдым", - тип маҡтанған. Улар беҙҙең ерҙәрҙе, колхоз-совхоздарҙың мөлкәтен бушлай алдылар ҙа, миллионлап ҡаймағын ғына һөҙҙөләр ҙә, ҡастылар. Ҡалған мөлкәтте, иген тогының тимерҙәрен, йәнәһе лә, бурыс өсөн тип, һүтеп алырға Ырымбурҙан килделәр. Бар ауыл халҡы күтәрелеп сығып, килеүселәрҙе ҡыуып ебәрҙек.

2006 йылда Тәтешле районында милли үҙәктәр, тарихи-мәҙәни үҙәк етәкселәре төбәк-ара конференцияһы үткәйне. Унда 1-се Башҡорт мәҙәни-тарихи үҙәк етәксеһе булараҡ сығыш яһарға тура килде. Шунда Тәтешле районының хакимиәт башлығы: "Һеҙ мине милләтсе тип уйламағыҙ, әммә беҙҙең районда бер генә әрмән милләтле кеше йәшәмәй. Бер мәл минең бүлмәгә әрмәндәр килеп инделәр ҙә, сығырға теләмәйҙәр. Шунан милиция начальнигына шылтыратып, бер сәғәт эсендә район территорияһынан сығарып ебәрергә ҡуштым", - тине.

Бөгөн фермерҙар яҡшылап эшләп китә алмайҙар. Улар хатта яҡшы иген йыйып алған хәлдә лә, уны һата алмайҙар. Шуға күрә бөгөн фермерлыҡ энтузиазмға, патриотлыҡҡа ғына тороп ҡала бара. Эштәр былай барһа, күптәр тиҙҙән пай ерҙәренән баш тарта башлаясаҡ. Ни өсөн тигәндә, былтыр пай еренә һалым 363 һум булһа, хәҙер мең һумдан ашып китте. Бөгөн хөкүмәт резерв ерҙәр тураһында закон әҙерләй. Резерв ерҙәрҙе фермерҙар, пайсылар баш тартҡан ерҙәр тәшкил итәсәк. Аҙаҡтан закон нигеҙендә ул ерҙәр донъя кимәлендә аукцион аша һатылыуға ҡуйылыуы бар. Рәсәйҙә милли мәсьәлә ер мәсьәләһенә бәйле рәүештә тыуған. Шуға күрә милләтебеҙҙе һаҡлап ҡалырға уйлаһаҡ, иң беренсе нәүбәттә еребеҙҙе һаҡлау кәрәк.

**Рәмил ХӘСӘНОВ, Нуғай ауылы имам-хатибы:** Әхмәр ҡустының мәҡәләһен тыныс ҡына уҡып булманы. Сөнки минең ауылым Нуғай байҙары үҙ ерен масалдарға һатып, хәҙерге Бикеш ауылы барлыҡҡа килгән. Һаҡмар буйының матур-матур туғайҙары ошо рәүешле ситтәр ҡулына күскән. Был турала Шәһәрғәзе сәсән Ғәбдиев бәйет яҙып ҡалдырған. Олатайҙарыбыҙ еребеҙҙе һатҡан, бының һөҙөмтәһен бөгөн беҙ татыйбыҙ.

**Баймөхәммәт хәҙрәт ҒИЗЗӘТУЛЛИН, Баймаҡ район мөхтәсибиәте имам-хатибы:** Борон-борондан халҡыбыҙ үҙ тыуған ерен күңелендәге динен, йөрәгендәге Аллаһы Тәғәләне һаҡлағандай һаҡлаған, шуның өсөн бер кемгә лә уны бирмәгән. Бөгөн иһә ергә хужа булыу хаҡындағы сертификат ҡағыҙы үткән быуаттың 90-сы йылдарҙағы ваучерға әүерелеп китмәҫ тимә. Ул мәлдә беҙ ваучерҙарға ҡағыҙ киҫәгенә ҡарағандай көлөп кенә ҡараныҡ. Һөҙөмтәлә илебеҙ халҡының 80 йылдан ашыу туплаған байлығы шул ваучерҙар ярҙамында айырым кешеләрҙең ҡулына күсте.

Сибай ҡалаһында курд милләтле кешеләр күбәйҙе. Уларҙың балаларының беҙҙең балаларға: "Һеҙ бөтәсәкһегеҙ һәм был ер беҙҙеке буласаҡ, һеҙ беҙгә ҡол буласаҡһығыҙ" - тип белдереүен ишетеүе аяныслы. Башҡорттарға уларҙың янында йәшәүе бик ауыр һәм улар тиҙ генә фатирын шул уҡ курдтарға һатып, күсеп китергә мәжбүр. Һөҙөмтәлә, сит ҡәүем вәкилдәре тотош бер подъезды биләй. Улар ошо юл менән беҙҙә күбәйә генә бара. Ошо хәлгә үҙебеҙ юл ҡуйғанбыҙ бит. Һуңғы ваҡытта курдтар ауылдарҙағы буш йорттарҙы һатып алырға ынтыла. Быға юл ҡуйырға ярамай. Әгәр ҙә уларҙың береһе килеп ауылға морон төртһә, документ нигеҙендә йортон законлаштырһа, ул ауыл да шул уҡ подъезд хәлендә ҡаласаҡ, йәғни халыҡ унан күсеп китәсәк. Халыҡ әкиәтендәгесә: "Ҡуяндың йорто ҡабыҡтан, төлкөнөкө боҙҙан булған..." - тигән һымаҡ була инде бында. Әгәр ҙә беҙ ауылдарыбыҙҙы ситтәргә бүләк итһәк, бының әсеһен киләсәк быуындар кисерәсәк.

Башҡорт милләте һәм ислам дине бер ул. Ситтән ағылған традицион булмаған исламды һөрөүселәргә, секталарға ышанмағыҙ. "Ата юлы" тигән секта кешеләрҙе "кесе хажға"ла барырға өгөтләп, күпме зиһенде ағыулап өлгөрҙө. Уларҙың халыҡты төрлө психотроп тәьҫирле үләндәр менән ағыулап, үҙенә буйһондороуы асыҡланды. Әгәр ҙә еребеҙҙе яттарға һатыуға юл ҡуймаһағыҙ, беҙгә ундай яман уйлы кешеләр ҙә килеп инә алмаҫ.

**Илгиз БАЙЫМОВ, Баймаҡ район хакимиәтенең эштәр идарасыһы:** "Киске Өфө"лә Әхмәр ағай, ысынлап та, бик мөһим мәсьәлә күтәрә. Әлбиттә, тыуған еребеҙҙе, ауылдарыбыҙҙы ситтәрҙең кире йоғонтоһонан һаҡлау һәр беребеҙҙең, шул иҫәптән район хакимиәтенең дә изге бурысы. Был республикабыҙ етәкселеге тарафынан ҡуйылған "Кешеләр өсөн эшләргә!" тигән программа һүҙҙәренең бер үтәлеш формаһы ла. Район етәкселеге был мәсьәләнең мөһимлеген бик яҡшы аңлай һәм беҙ көн һайын ошо эш менән шөғөлләнәбеҙ. Ҡөрьәндә лә ҡиәмәт көнөндә етәксе кешенең үҙе өсөн генә түгел, үҙе яуаплы булған кешеләр өсөн дә яуап тотоуы хаҡында әйтелгән.

Бәхеткә күрә, районыбыҙҙа йәмәғәт ойошмалары, ҡатын-ҡыҙҙар советы, "Ағинәйҙәр", "Аҡһаҡалдар" клубтары яҡшы эшләп килә. Бына әлеге сараны ойоштороусы Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының да эше йәнләнә хәҙер. Ҡыҫҡаһы, әгәр ҙә барыбыҙ ҙа берҙәм һәм бергә булһаҡ, сит йоғонтоға бирешмәҫбеҙ, тыуған еребеҙҙе, ауылдарыбыҙҙы ла һаҡлап ҡалырбыҙ.

**Зәки ХАММАТОВ, республика "Аҡһаҡалдар ҡоро" рәйесе урынбаҫары:** Бынан дүрт йыл алда беҙ Башҡортостанда ер мәсьәләһенең концепцияһын эшләгәйнек. Документты Президентҡа, Хөкүмәткә, Ауыл хужалығы министрлығына ебәрҙек. Һалып ҡуйҙылар шикелле. Миңә өҫтән бер шылтыратыу булды. "Һин нимә унда әллә ниндәй концепция ебәреп ятаһың?" тине шылтыратыусы. Мин уға: "Һин әгәр ҙә минең менән ундай тонда һөйләшһәң, телефонды ташлайым", - тигәс кенә теге ҡәҙимге һөйләшеү тонына күсте. Беҙ быйыл республиканың аҡһаҡалдар ҡоро менән бергә ер хужаларының йыйынын үткәрергә уйлайбыҙ. Беҙҙе пай ере бирәбеҙ тип, асылда, танытма биреп кенә алданылар. Хәҙер иһә, пай ере өсөн һалымды арттырып, ул танытмаларҙы ваучерға әйләндерергә итәләр. Йыйында беҙ ошо турала һөйләшәсәкбеҙ. Ҙур ауылдарҙан өсәр кешене шул йыйынға саҡырабыҙ. Кемдәр бара икәнлеген үҙегеҙ билдәләгеҙ.

Бөгөн Рәсәйҙең ни өсөн яртыһынан күберәк ере эшкәртелмәй ята, ни өсөн 35-40 процент ҡына ере эшкәртелә? Сөнки барлыҡ закондар ер хужаларына ҡаршы эшләй. Шуға күрә РФ Президенты бөгөн Дәүләт Думаһы аша шундайыраҡ законды үткәрергә йыйына. Закон проекты буйынса, әгәр ҙә крәҫтиән өс йыл һуҙымында ҡуртымға алынған ерҙе һөрөп, сәсеп барһа, дүртенсе йылына ул ер уға бушлай мөлкәткә бирелергә тейеш. Был закон беҙҙең халыҡты ерле итеп ҡалыр өсөн ҙур мөмкинлектәр тыуҙырасаҡ. Шул уҡ ваҡытта ошо законды файҙаланып, беҙҙең ерҙәргә хужа булып ҡалырға теләүсе ситтәр ҙә тик ятмаҫы көн кеүек асыҡ. Киләсәктә ерһеҙ башҡорт милләте булмаясағын да бик яҡшы аңларға тейешбеҙ.

**Радмир ИҪӘНБАЕВ, Баймаҡ район хакимиәте башлығы урынбаҫары:** Барлыҡ урындарҙа ла ағинәйҙәр ҡорҙары ғына әүҙем эшләй, ир-аттар, һәр ваҡыттағыса, ситтә тороп ҡала. Ҡайһы ваҡыт саманан тыш әүҙемлек күрһәтеп тә ташлайбыҙ. Бөгөн ҡатын-ҡыҙ руль артында ултыра, эргәһендә ире бара. Ир бар саҡта ҡатын-ҡыҙ руль артына ултырырға тейеш түгелдер. Ҡатын-ҡыҙ руль артына кәрәк саҡта ғына ултырһын ул. Беҙҙең күп кенә проблемаларыбыҙ тап ошонан килеп сыға. Ауылдарҙа Ярат ауылындағы кеүек атайҙар ҡорон булдырырға кәрәк. Юғиһә, улар бөгөн ир түгел, иптәш кенә булып киттеләр.

Быларҙы нимә өсөн һөйләйем һуң? Сөнки Әхмәр ағай үҙенең мәҡәләһендә күтәргән проблемалар барыһы ла тәрбиә эшенең насар ҡуйылыуынан да килеп сыға. Бөгөн балалар ата-әсәләренә "Атай, әсәй" тип өндәшер урынына "һин" тип өндәшә. Йолаларыбыҙ ҙа онотола. Туйҙар ҙа кафеларҙа ғына уҙғарыла. Элеккесә, ҡыҙ менән кейәүҙең туғандары ҡоҙалашмай, туғанлашмай. Ҡыҙ яғы өҫтәлдең бер яғында, егеттеке икенсе яҡта ултырып, сәкәштереп эсеп, ҡайһы ваҡыт һуғышып ҡайтып китәләр ҙә, туғанлыҡ шуның менән вәссәләм. Әгәр ҙә ауылдарҙа туғанлыҡ тойғоһо көслө булһа, ситтәр беҙгә килергә баҙнат итмәҫ ине. Беҙҙең балалар үҙенең туғандарын белеп үҫергә тейеш. Мине олатайым ат арбаһына ултыртып, аҙна буйына ауылдар буйынса йөрөтөп, туғандарыбыҙ менән таныштыра торғайны. Бөгөн ауылдарҙа туғанын ғына түгел, хатта күршеһен дә белмәүселәр-күрмәүселәр бар. Яңыраҡ миңә бер ауылдан әсәй кеше килде. Ул үҙенең иренән балаларынан баш тарттырырға итеп, ҡағыҙ яҙҙырырға тырыша. Баҡтиһәң, пособиеһын арттырыу, дәүләттән бушлай йорт алыр өсөн генә кешеләр ошондай юлға бара башлаған. Былдай хәлдең беҙҙең милләттә бөтөнләй булғаны юҡ. Үкенескә күрә, ошо юл менән, йәғни балалар иҫәбенә йортло булырға теләүселәр күбәйҙе. Кеше бит йортон үҙ ҡулы менән төҙөргә тейеш. Бөгөн беҙ бөтөн нәмәне күктән, хөкүмәттән көтәбеҙ.

Ер мәсьәләһе, ысынлап та, йылдан-йыл киҫкенләшә. Бөгөн районыбыҙҙың Казанка ауылына курдтар пропискаға торорға, теркәлергә тырыша. Мәктәбендә балалар һаны тулмағас, бер әсәй кеше етмәгән балаларҙы курд балалары менән тулыландырырға тәҡдим итә. Ә ниңә беҙ үҙебеҙҙең башҡорт мәктәбен уларға бирергә тейешбеҙ һуң? Йәшеренбатырыны юҡ, бөгөн бөтөп барған ауылдарыбыҙға сит кешеләр ынтыла. Беҙ үҙебеҙҙең байлыҡты тапап йөрөйбөҙ, күрмәйбеҙ, тик үҙебеҙҙең ожмах илендә йәшәгәнебеҙҙе аңламайынса, йәнәһе, аҡса эшләргә, тип Себергә, тағы ла ҡайҙалыр китәбеҙ. Ишей ауылында 1997 йылдарҙа Магнитогорскиҙан ике кеше килеп, буш торған ике йортто һатып алды. Ул саҡта халыҡтың тауышы көслө булды. Сход йыйылышы менән уларҙы барыбер китергә мәжбүр иттек. Бынан тыш, тағы ла тәртип боҙған өс ғаиләне беҙҙең ауылға поселениеға ебәргәйнеләр. Бөгөн улар ҙа ауылда юҡ. Бына ошо рәүешле көрәш барырға тейеш. Сит кеше беҙҙең ауылдарға бер башын тығып алһа, башҡа сыҡмаясаҡ.

## ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Баймаҡ районының барлыҡ ауылдары вәкилдәре ҡатнашлығында үткән күсмә ултырыштарҙа унда күтәрелгән мәсьәләләр буйынса район халҡына мөрәжәғәт ҡабул ителде. "Беҙ бөтәбеҙ ҙә гүзәл еребеҙгә ҡунаҡ ҡына булып килгәнбеҙ. Икһеҙ-сикһеҙ йыһан киңлегенән ҡарағанда, кеше ғүмере шул тиклем ҡыҫҡа, күҙ асып йомғансы үтә лә китә. Шуға күрә, аҙмы-күпме бирелгән ғүмерҙәребеҙҙең ҡәҙерен беләйек, был яҡты донъяларҙа бер-беребеҙгә ярҙам ҡулы һуҙып, татыу, матур ғүмер кисерәйек. Нисәмә быуат буйы ата-бабаларыбыҙ телебеҙҙе, ер-һыуыбыҙҙы күҙ ҡараһы кеүек һаҡлаған. Хәҙерге ваҡытта был изге бурыс һәр беребеҙ иңендә. Һәм беҙ был бурысыбыҙҙы - ата-бабалар аманатын лайыҡлы рәүештә үтәргә тейешбеҙ..." тип башланып китә ул мөрәжәтнамә. Был юғары пафос менән әйтелгән дөйөм һүҙҙәр генә түгел. Баймаҡтар тыуған еребеҙҙе һаҡлау буйынса дөйөм халыҡ һүҙен әйтте. Аууу, тағы ла кемдәр уларҙың һүҙен күтәреп алыр, ишетәһегеҙме, әбйәлилдәр, бөрйәндәр, учалылар, белореттар, йылайырҙар, күгәрсендәр, ейәнсуралар, ишембайҙар һәм башҡалар?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

✓ **_Ғәжәпкә, элек Сабит алып ҡайтҡан эш хаҡын аҙаҡҡы тиндәренә тиерлек һалдырып алған ҡатыны һуңғы осорҙа уның аҡсаһына битараф ҡалды. "Үҙеңә кесә расходтарыңа ҡалдыр...", ти башланы ул эш хаҡы алып ҡайтҡан иренә. Сәйер..._**





Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ

# Мәк сәскәһе

(Хикәйә)

Ольга Николаевна йәштәргә Гөлгөнә йәшәгән фатирҙы бүләк итте. Ҡыҙының исеменә яҙҙырылған таныҡлыҡты Гөлгөнәнең ҡулына тапшырҙы. "Йәштәргә беҙҙән бер һыйыр", тип кенә әйтергә хәленән килгән Сабиттың ата-әсәләре алдында төп ҡоҙағый "бер башҡа" юғарыраҡ ине. Бигүк ҙур урын биләмәһә лә, уның ҡала хакимиәтендә эшләгән оло бер түрәнең сәркәтибе булыуы үҙе ни тора! Хатта университет етәкселәрен дә тынлата ала бит ана шул начальнигы аша. Тамада мәжлесте фәҡәт урыҫ телендә генә алып барғас, туйҙың башынан аҙағына ҡәҙәр Хәким ағай менән Зөлхизә апай тамаша ҡарарға килгән сит кешеләрҙәй тик ултырҙы. Етмәһә, ялланып килгән оркестр ҡолаҡ тондорғос барабанға ҡушылып, һүҙҙәре, көйө лә таныш булмаған ниндәйҙер йырҙарҙы туҡтауһыҙ йырланы, дөрөҫөрәге, аҡырҙы. Туй аҙағына еткәндә, был мәжлес ҡасан тамамланыуын түҙемһеҙлек менән көтөп ултырған ата-әсәһенең генә түгел, хатта Сабиттың үҙенең башы шаулай ине. Төрлө төҫтәге шарҙар менән биҙәлгән оҙон аҡ "лимузин" йәштәрҙе Гөлгөнәнең фатирына алып килде.

Тәүге никах төнөндә ошо гүзәлдәрҙән гүзәл "мәк сәскәһе"нең нисек "асылғанын" иҫләгәс, Сабиттың тәндәре сымырҙап китте. Таң атҡансыға ҡәҙәр "аҡылынан шашырға" мәжбүр иткән кәләшенең тылсымлы тәненән сихыр хәлендә ине ул. Ошоғаса ҡатын-ҡыҙҙар менән һирәкләштереп булһа ла осрашырға тура килеүенә ҡарамаҫтан, бындайын да ләззәтле төндө үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр татыны ул.

Ғаилә ҡорған йәштәр башҡа кешеләр һымаҡ уҡ йәшәп алып киттеләр. Артыҡ ҙур булмаһа ла, эш хаҡын ваҡытында алып, һәр саҡ йәш кәләшенә биреп торған Сабит Хәкимович, хәләл ефетен кейендерә һәм туйындыра алырлыҡ эшләйем, тип һананы үҙен. Кардиохирургия бүлегенең ординаторы булараҡ, үҙенең уйынса, бигүк әҙ ҙа алманы ул эш хаҡын. Өҫтәүенә, университетта лекциялар уҡыны, семинар дәрестәр алып барҙы. Әммә ай аҙағына ҡәҙәре бер-ике аҙна ҡаламы-юҡмы, Гөлгөнә аҡса бөтөүенә зарлана ла башлай. Шуға Сабит өҫтәмә төнгө дежурҙарға ла йыш йөрөй башланы. Үҙең яратып, йән атып алған сәскәң өсөн ниҙәр генә эшләмәҫһең. Өйләнешкәндәренә бер йыл тигәндә, улдары тыуҙы. Сабит уға Сәлим тигән башҡорт исемен ҡушырға иткәйне, Гөлгөнә ҡырҡа ҡаршы торҙо. "Минең ғүмер буйы Гульгинья тигән телде һындырырлыҡ исем тағып йөрөүем етмәгән, һин тағы балаға шундай әллә ҡасан уҡ иҫкереп бөткән исемде бирмәксеһеңме? Короче, балаңың исеме Слава буласаҡ. Вячеслав, и точка!" Быға ла әллә ни ҡаршылашманы Сабит. Гөлгөнәнең артабан уҡыуына ҡамасаулай, тип биш айы тулғас, баланы Сабиттың ата-әсәһенә ауылға алып ҡайтып ҡалдырҙы. Үҙҙәренең һөйләшеү диалекты менән әйтмешләй, "тас атаһы..." булған ҡара ҡашлы, ҡара сәсле, һоро күҙле ейәнен Хәким ағай менән Зөлхизә апай яратып, Сәлим тип йөрөттө барыбер...

Тормош тигән нәмә бер урында тормай. Һәр ваҡыт ҡына һин теләгәнсә лә бармай икән шул. Һис аямай күтәреп тә һуғып ҡуя ҡайсаҡ. Ольга Николаевна көтмәгәндә эшенән бушатылды. Ни өсөн икәнлеге Сабит өсөн сер булып ҡалды. Быға әллә уның һәр саҡ таяныс булып торған ҙур начальнигының урынынан шылыуы сәбәпсе булды, әллә ни. Шул ваҡытҡа тиклем инде бишенсе курсҡа йөрөй башлаған (дөрөҫөрәге, йөрөмәй башлаған) Гөлгөнә ханым үҙен һис ел-ямғыр теймәҫтәй итеп тоя ине. Әммә уның әсәһе эштән бушатылыуын белгән факультет деканы ялҡау студентты уҡыуҙан ҡыуырға тигән ҡарарға килде. Зачеттарын йыйып ала алмау сәбәпле, сираттағы сессияның имтихандарына индерелмәгән Ишбулдинаның (ул үҙ фамилияһында ҡалғайны) артабан да студент булып ҡалыуына юл ҡуйманылыр. Университетта һәм дауаханала абруйлы артҡандан-арта барған Сабит Хәкимович та быға ҡаршы йоғонто яһай алманы хатта. Тик һуңынан ректорҙың бойороғондағы "исключить..." тигән пунктты "предоставить академический отпуск..." тип алыштырыуҙарына ғына өлгәште. Шуға ҡарамаҫтан, университетта уҡыуын дауам иттерергә Гөлгөнәнең үҙенең дә әллә ни теләге булманы. Китергә икән - китергә... "Дүрт курс уҡыны, шәфҡәт туташы булып эшләргә хоҡуҡлы" тигән танытма бирҙеләр уға. Сабит ярҙамында дауахана бүлектәренең береһенә төнгөләккә дежурға эшкә лә урынлашты.

Ваҡыт тигәнең үтә торҙо. Гөлгөнәнең ике бүлмәле фатирында икәүҙән-икәү йәшәй бирҙеләр. Инде дүртенсе йәш менән барған Славик-Сәлимде ауылдан алып ҡайтырға, нишләптер, Гөлгөнәнең уйына ла килмәне. Был хаҡта Сабит уға бер нисә тапҡыр әйтеп ҡараны ла, ҡул ғына һелтәне. Ярай әле, атаәсәһе ҡарамағында малай. Һирәгерәк булһа ла ҡайтҡылап, күрешеп торалар. Сабит күбеһенсә яңғыҙ ҡайта ауылға. Сөнки ҡәйнә йортона бер-ике тапҡыр ғына килгән Гөлгөнәгә "ауыл һауаһы" оҡшаманы. Ғүмере буйы ҡалала йәшәгән назлы килендең мал һарайы еҫенә "аллергия" ине. Ольга Николаевна "сей башҡорт" йөҙлө ейәнен тәүге көндән уҡ оҡшатманы. Сәлимде ауылға алып ҡайтып киткәне бирле, уны күрергә лә ынтылманы. Кейәүен дә өнәп етмәгән ҡәйнәһе уларға ҡыҙы яңғыҙы саҡтарҙа ғына килергә тырыша ине.

Сабит Хәкимовичты өлкән ординатор дәрәжәһенә үрләттеләр. Аҙнаһына өсәр көн кеше йөрәгенә ҡатмарлы операциялар яһаны ул. Ауырыуҙар уға әләгергә тырыша. Тап шул осорҙа Гөлгөнәлә сәйер үҙгәреш һиҙә башланы Сабит. Ғәжәпкә, элек Сабит алып ҡайтҡан эш хаҡын аҙаҡҡы тиндәренә тиерлек һалдырып алған ҡатыны һуңғы осорҙа уның аҡсаһына битараф ҡалды. "Үҙеңә кесә расходтарыңа ҡалдыр...", ти башланы ул эш хаҡы алып ҡайтҡан иренә. Сәйер...

Ул көндә Сабит Хәкимович үҙенең эш бүлмәһендә ауырыу тарихы яҙып ултыра ине.

-Мөмкинме? - тине ҡыйыуһыҙ ғына шаҡып ишек асҡан ҡатын. Кейеме, ҡиәфәтенә ҡарағанда уҡ ауыл еренән килгән икәнлеге күренеп торған был ҡатын үҙен бүлексәлә операция яһатырға көтөп ятҡан Хәйбуллин Рәсимдең хәләл ефете тип таныҡты.

-Әйҙә, үтегеҙ, - тине Сабит Хәкимович яҙыуынан айырылып. Моғайын, "минең иремә операцияны фәҡәт үҙегеҙ яһауығыҙҙы үтенәм", тип әйтергә килгәндер. Ундай мөрәжәғәт менән йыш ҡына килгеләйҙәр шул...

Сабит Хәкимович хаталанманы. Ауылдан килгән был ҡатын тап ана шундай үтенес менән ингәйне. Әммә уның тағы бер йомошо бар ине.

-Сабит Хәкимович, - тине ҡатын ояла-ояла, - бына һеҙгә ошо конвертты алып килгәйнем...

-Ниндәй конверт? - башта аңламайыраҡ торҙо Сабит. Ярайһы ғына тос конвертты ҡулына алды һәм эсен асып ҡараны. Конвертта - аҡса!

-Был нимә? - Сабит ҡатындың күҙҙәренә текәлде.

-Бында илле мең, - тине ҡатын уңайһыҙланыуынан тағы ла ҡыҙара биреп. - Аҙыраҡ, тиһәгеҙ, бер аҙҙан тағы ла килтерермен. Хәҙергә аҡса яғы...

-Кире алығыҙ конвертығыҙҙы, ханым, - тине Сабит сыҙамай урынынан тороп. Миңә операция өсөн эш хаҡы түләйҙәр. Һеҙҙең бер тинегеҙ кәрәкмәй. Минең өсөн һеҙҙең ирегеҙҙең тик һауығып сығыуы мотлаҡ... Ә миңә аҡса алып килергә кем ҡушты һеҙгә?

-Әллә... Ошонда операция яһатып сыҡҡан кешеләр менән кәңәшләшкеләгәйнек...

-Бынан ары бер ҡасан да бындай мәсьәлә менән миңә яҡынламағыҙ, - тине Сабит Хәкимович бер аҙ ҡатырғанып. - Хушығыҙ.

- Ә минең иремә операцияны үҙегеҙ яһағыҙ инде, зинһар...

- Ә был үтенесегеҙҙе кире ҡаға алмайым. Ирегеҙҙең исем-фамилияһы кем тинегеҙ әле? - өҫтәлдә ятҡан ручкаһына үрелде...

Кәйефе тамам боҙолоп эштән ҡайтып ингәндә Гөлгөнә сираттағы өр-яңы костюмын кейеп, көҙгө алдында әйләнгеләй ине.

-Килешәме? - тине ҡатын ҡояштай балҡып.

-Килешә, - тине Сабит ҡоро ғына. Йәнәһе кенә сисенеп, ванна бүлмәһенә инде. Һалҡын душ аҫтында ҡойоноп алғас, бер аҙ еңеләйгәндәй булды.

Киске аштан һуң Гөлгөнәгә әлеге ҡатындың аҡса менән тулы конверт алып килеүен һөйләне.

- Илле мең! Минең айлыҡ эш хаҡымдан ике мәртәбәгә тиерлек артыҡ...

- Подумаешь, илле мең... - тине бер аҙ ғына тулылана башлаған ҡатыны бер ҙә иҫе китмәгәндәй. - Хәҙерге ваҡытта илле мең - ерунда ғына бит ул. Алырға кәрәк ине... Кеҫәңде йыртыр, тип ҡурҡтыңмы әллә?.. - Йөҙөнә ғәжәпләнеү билдәһе сығарып, ҡулдарын йәйеп ебәрҙе хатта.

-Мине кемгә һанайһың?.. - тип тәүге мәртәбә асыуланды ул хәләл ефетенә. - Дауалаған өсөн бер ҡасан да кешенән аҡса алғаным юҡ һәм алмаясаҡмын!

-Әллә, үҙең ҡара... - Бер аҙ йомшарғандай булды Гөлгөнә. - Күпме нервыларыңды бөтөрөп, кешеләргә ғүмер биреп тә, ниндәйҙер "тинлектәр" генә алып йөрөгәнең өсөн үҙеңде йәлләп кенә әйтәм...

-Күпме алһам да, улар минең намыҫ менән эшләп тапҡан хәләл аҡсаларым. Ә харам миңә кәрәкмәй! Кешеләргә ғүмерҙе... мин бирмәйем, ә Аллаһ бирә. Операциялар яһау - минең һөнәрем генә...

Башҡаса был хаҡта һүҙ ҡуҙғатманылар. Сабитҡа тағы бернисә мәртәбә "аҡса төртөргә" маташыусылар булды. Әммә үҙ эшен намыҫ менән үтәргә ғәҙәтләнгән хирург уларҙың "бүләгенән" һәр саҡ ҡырҡа баш тартты.

Гөлгөнә кескәй "Део Матис"ын йылтырап торған өр-яңы "Шевролет"ҡа алыштырҙы. Әлбиттә, уның өсөн әллә күпме аҡса өҫтәп түләгәндер. "Әсәйем бирҙе", тип кенә яуапланы ул был хаҡта ҡыҙыҡһынған иренә. Әлбиттә, хәҙер бөтөнләйгә икенсе урында - йорттар идараһында эшләгән әсәһенең эш хаҡы әллә ни ҙур ҙа түгел ине. Әммә бер ҡатлы "ауыл малайы" үҙенең һөйөклөһөнә тағы ла ышанды. Ул-былды, ваҡ-төйәкте тикшеренеп йөрөргә ваҡыты ла юҡ ине көнө-төнө тигәндәй эшкә сумған Сабиттың.

Кейәү булараҡ, Сабит үҙенең ҡайныһы Рәхимйән ағай менән танышып алырға хыялланды. Заманында Гөлгөнәне тәрбиәләп үҫтермәүенә, ҡәйнәһе менән бергә йәшәмәүҙәренә ҡарамаҫтан. Был хаҡта хәләл ефетенә лә әйтте.

- Бысағыма кәрәкме ул миңә?.. Минең өсөн донъяла юҡ ул... - тип кенә яуап бирҙе Гөлгөнә. Сабит башҡа был хаҡта һүҙ ҡуҙғатып торманы. Рәхимйән ағайҙың адресын белешмәләр бюроһы аша тапты. Яҡындағы район үҙәгендә йәшәй икән. Ял көндәренең береһендә, яңғыҙы ғына булһа ла барып, уның менән танышып алырға булды.

...Сабит ингәндә, ҡайныһы диванда "Киске Өфө" гәзитен ҡараштырып ултыра ине. Гәзитен һалды ла, урынынан етеҙ генә тороп, әлегә таныш булмауҙарына ҡарамаҫтан, инеүсе менән йылмайып килеп ҡул биреп күрешеп алды.

- Әйҙә, үтегеҙ, ултырығыҙ...

Сабит үҙе менән таныштырғас, бер аҙ яҫыраҡ битле, ҡалын ҡара ҡашлы был Бөрйән кешеһенең уңһыҙ ҙа алсаҡ йөҙө тағы ла яҡтырып китте.

- Кейәү булаһың, тимәк, - тип ҡуйҙы Рәхимйән Рәүеф улы. - Һөйәрбикә, сыҡ әле был яҡҡа, кейәү килгән, - бер аҙ тауышын көсәйтә биреп ҡатынын әйҙәне.

-Кейәү?.. - аш бүлмәһендә ниҙер эшләп йөрөгән ҡатыны альяпҡысына ҡулын һөртә-һөртә килеп сыҡты.

- Эйе, Өфөлә йәшәгән Гөлгөнә исемле ҡыҙым барлығы хаҡында әйтә торғайным бит. Ана шул ҡыҙым үҫеп, кейәүгә сыҡҡан.

- Ә-ә-әй, арыумы, кейәү, - тип ҡатын Сабитҡа бер аҙ еүеш ҡулдарын һондо.

"Нәҡ беҙҙең райондағы һымаҡ башҡортса тап-таҙа итеп һөйләшәләр", тип уйлап алды Сабит. Уларҙан ошондай бер-ике генә ябай һүҙ ишетеү менән күңелгә нисектер рәхәт булып китте.

Ҡыҙҙары Гөлгөнә тыуып, бер аҙ үткәс тә мәрйә ҡатыны менән айырылышыуы, ҡыҙын башҡаса бер ҡасан да күрмәүе хаҡында ҡыҫҡаса һөйләп алды Рәхимйән ағай.

- Гөлгөнәне күрергә бер-нисә мәртәбә барып та, әсәһе уны күрһәтеүҙән ҡырҡа баш тартҡас, нисек кенә ауыр булмаһын, башҡаса көсләшеп торманым, - тип һүҙен ослап ҡуйҙы ул, Гөлгөнәнең Сабит алып килгән фотоһын ҡарай-ҡарай. - Ҡалай әсәһенә ныҡ оҡшаған... Тик йөҙөндәге аҙ ғына булған башҡортлоҡ һыҙаттары уны тағы ла матурлай...

**(Дауамы бар).**

✓ *Беҙҙә элек-электән ҡумыҙҙа көйләп уйнау үҫешкән. Тәүҙә бер бармаҡ, ике, өс бармаҡ менән сиртәбеҙ, тирбәлдереп, ҡул һуғып ебәрәбеҙ. Шул алымдарҙы ҡулланып уйнағас, көй байый, тыңлаусының күңеленә хуш килә.*



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ҠУМЫҘСЫЛАРЫБЫҘ ҘА...

## донъяны яулай



**Башҡортостан ҡумыҙсылары Тыва республикаһында үткән II Халыҡ-ара "Хомус" фестиваль-конкурсында ҡатнашып, уңышлы сығыш яһаны. Конкурс хаҡындағы тәьҫораттары менән "Донъяның виртуоз ҡумыҙсыһы", Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты, Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артисы әлеге конкурстың еңеүсеһе Миңлеғәфүр ЗӘЙНЕТДИНОВ уртаҡлаша:**

- Халыҡ-ара ҡумыҙсылар конкурсы Тыва республикаһында икенсе тапҡыр үткәрелә. Тәүге тапҡыр 2005 йылда үткәрелгән булған. Ике бәйге араһындағы тәнәфес оҙаҡҡа һуҙылғанға күрә, республикала ҡумыҙ сәнғәте һүнеберәк ҡалған. Шуға ла уға яңы һулыш өрөр өсөн ҙур конкурс үткәрергә ҡарар иткәндәр. Бәйгегә сит илдәрҙән, Рәсәй төбәктәренән төрлө йәштәге ҡумыҙсылар килгәйне. Башҡортостан данын Сибай ҡалаһынан Дилара Рафиҡова етәкләгән "Яугел" ҡумыҙсылар ансамбле һәм мин яҡланыҡ.

Конкурста ҡатнашыусылар өсөн матур мәҙәни программалар әҙерләгәйнеләр. Беҙҙе республиканың иҫтәлекле урындары буйлап йөрөттөләр, музейҙарға алып барҙылар, йолалары менән таныштырҙылар. Енисей йылғаһы башланған Саян тауҙарының иң бейек һырттары буйынан үтергә тура килде. Ошо сәйәхәттәр барышында республика тураһында аҙмы-күпме мәғлүмәт алдыҡ.

Милли спорт төрҙәренән милли көрәш ныҡ үҫешкән икәненә иғтибар иттем. Әлбиттә, уларҙың милли көрәше беҙҙекенән айырыла. Нимәһе ҡыҙыҡ: был төр бәйгелә еңеүселәргә ҙур призлар, автомобилдәр, тракторҙар бүләк итәләр. Был да милли көрәшкә мөнәсәбәттең яҡшы икәнен раҫлаусы күрһәткес бит.

Ауыл хужалығында малсылыҡ алға киткән. 500-1000 баш һарыҡ, эре мал, йылҡы тотҡан фермерҙар күп. Фермерлыҡ эшен дәртләндереү ҙә ҡаралған: кем малының башын 1 меңгә еткерә, уға автомобиль бүләк итәләр. Ҡайһы бер районбарында болан, дөйә көтәләр.

Тағы шуға һоҡландыҡ: тыва халҡы туған телен бик ҡәҙерләй, бөтә ерҙә лә үҙ телдәрендә аралашалар. Халыҡ-ара конкурс булыуға ҡарамаҫтан, сәхнәгә сыҡҡанда ла тываса сығыш яһанылар.

Программаның икенсе көнөндә ҡумыҙ сәнғәте үҫешенә арналған түңәрәк ҡор булды. Унда мәҙәниәт министры ла ҡатнашты. Ул бик рухлы, халҡы, теле яҙмышы өсөн борсолған, тыва мәҙәниәтен күтәреүгә күп көс һалған кеше. Үҙе дизайнер, тыва халҡының милли кейемдәре буйынса белгес.

Түңәрәк ҡор артында һөйләшкәндә министр тыва халҡында ҡумыҙ сәнғәте һүлпәнәйә барыуы тураһында борсолоу белдерҙе. Хәлде яҡшыртыр өсөн киләһе йылдан алып йыл һайын ҡумыҙсылар бәйгеһе үткәрергә ҡарар иттеләр. Бынан тыш, өс йылға бер тапҡыр халыҡ-ара ярыштар үткәреп торорға ла һөйләштеләр.

Конкурс яңғыҙ башҡарыусылар һәм ансамблдәр араһында үтте. Беҙҙең, Башҡортостандан барған ҡумыҙсыларҙың сығышы баһалама ағзаларына ла, халыҡҡа ла нык оҡшаны. Матур, сағыу милли кейемдәрҙәге "Яугел" ансамбле апайҙары ағас ҡумыҙҙа сығыш яһаны, йырлап та, бейеп тә күрһәттеләр. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса улар ансамблдәр араһында икенсе урынды яуланы. Солистар араһында Дилара Рафиҡова - икенсе урын, ә мин беренсе урын яуланым. Шулай итеп, тыуған Башҡортостаныбыҙға төп призларҙы алып ҡайттыҡ.

Конкурстарҙың һәйбәт яғы шул: улар айырым сәнғәт төрөнөң үҫешенә этәргес булып тора. Сөнки ярыштарҙа иң оҫта башҡарыусылар, үҙҙәренең иң яҡшы программалары менән сығыш яһай. Башҡа яҡтарҙан килгән конкурсанттарҙы ҡарайһың, сағыштыраһың. Нимәгәлер өйрәнәһең, үҙеңдең тәжрибәңде башҡаларға өйрәтәһең. Тывалағы конкурс ваҡытында балаларҙың уйнарға өйрәтеүебеҙҙе һорап, арттан эйәреп йөрөүе ҡыуандырҙы.

Һәр халыҡтың ҡумыҙҙа уйнау алымы бар. Тывала боронғоса, бер бармаҡ менән генә уйнайҙар. Ә башҡорт ҡумыҙ сәнғәтенең үҙенсәлеге шунда: беҙҙә элек-электән ҡумыҙҙа көйләп уйнау үҫешкән. Беҙ төрлө алымдар ҡулланып уйнайбыҙ. Тәүҙә бер бармаҡ, ике, өс бармаҡ менән сиртәбеҙ, тирбәлдереп, ҡул һуғып ебәрәбеҙ. Шул алымдарҙы ҡулланып уйнағас, көй байый, тыңлаусының күңеленә хуш килә. Әгәр бер төрлө генә сиртеп торһаҡ, бер ниндәй үҫеш тә булмаҫ ине. Импровизациялар, имитациялар, марштар уйыныбыҙҙы тағы ла төрлөләндерә. Әлеге ваҡытта Саха республикаһында һәм Башҡортостанда ҡумыҙ сәнғәте иң алдынғыһы иҫәпләнә. Был хаҡта Тывала ла беләләр булып сыҡты. Эш графигы тығыҙ булыу сәбәпле, Тыва республикаһының мәҙәниәт министры конкурсты тулыһынса ҡарай алманы. Ә бына беҙҙең ҡумыҙсыларҙы тыңлар өсөн махсус рәүештә эшенән айырылып килде.

**Шулай итеп, республика ҡумыҙсылары үҙҙәренең уңыштары менән даими рәүештә ҡыуандырып тора. Миңлеғәфүр Зәйнетдинов әйтеүенсә, Башҡортостан данын яҡлаясаҡ, халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен донъяға таратасаҡ һәләтле быуын да үҫеп килә. Улар шулай уҡ конкурс-фестивалдәрҙә еңеү яулайҙар. Бынан тыш, ҡумыҙ сәнғәте үҙе лә үҫешә, камиллаша бара. Быға, әлбиттә, республикала үткәрелә килгән ҡумыҙсылар бәйгеләре лә булышлыҡ итә, ти Миңлеғәфүр Зәйнетдинов.**

**Азамат САЛАУАТОВ яҙып алды.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# СӘСКӘМЕН, ТИП ОСОНМА...

## ғүмеркәйе унын ҡыҫҡа

Һәр табындың үҙ һыйы, һәр бәндәнең үҙ уйы.

Йоҡлап ятма - һимерерһең, йөрөр булһаң - тау аша ла һикерерһең.

Биште биреп ҡыуан, берҙе алып шатлан.

Иртә йөрөһәң - ҡалъя ҡабырһың, һуңға ҡалһаң - эләгеп ҡоларһың.

Юҡҡа-барға сеңләмә - йәшең сыҡмаҫ, кеше малына ымһынма - усың тулмаҫ.

Йәшел үлән - ер йәме, аҡылы һүҙ - күңел күрке.

Аҙаланған ул ата-әсәһенә ылыҡмаҫ, юлдан яҙған үҙ илен дә танымаҫ.

Сыҡҡан мал иҫәпләнһә лә, ингәне һаналмай.

Ыжыу-мыжыу йән биҙҙерә, аҡыллы һүҙ дәртләндерә, үҫендерә.

Зарланыуға, кәрәкмәгән шөғөлгә ваҡыт әрәм итмә - бәләкәй генә фәһемле эш башҡар.

Ҡәҙер сере, асҡысы үҙеңдә - башҡаларҙы ҡәҙер ит.

Үткәндәрҙе уйлаһаң - уйылдыра, уйламаһаң - муйылдыра.

Донъяны күҙең күрһен, аҡылың тәсфирләһен, йөрәгең алтын һандыҡҡа һалһын.

Үҙәге нык асыҡмаҫ, тауға менһә лә арымаҫ.

Туҡ бәйелле шөкөр итер, асҡаҡ күпте өмөт итер.

Туҡ тоҡҡа, әснәкет ҡорһаҡҡа тултыра.

Төнгә ҡарай ашанма - ятыр ҡорһаҡ яңшамаҫ.

Туған телең онотма - оңҡотҡа әйләнерһең, тыуған ереӊ онотһаң - һуҡбай кеүек йәшәрһең.

Сәскәмен, тип осонма, унын ғүмере бик ҡыҫҡа, һулығанын күрмәй ҙә ҡалаһың.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАРЫҺЫ ЛА...

## дәүләт сәйәсәтенә бәйле

**Айтуған АҠМАНОВ, БДУ-ның тарих факультеты Рәсәй тарихы кафедраһы мөдире, тарих фәндәре докторы, профессор:** Бөгөнгө көндә Рәсәйҙә йәшәүсе халыҡтар, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, баҙар иҡтисады ысынбарлығына яраҡлашырға тырыша. Әммә ил иҡтисады инде егерме йылдан ашыу "баҙар шарттары" йүнәлешендә үҫһә лә, күптәр яңы шарттарға һаман тулыһынса өйрәнеп бөтә алмай һымаҡ. Шуға, бөгөн иң етди мәсьәләләрҙең береһе - халыҡтың йәшәү кимәлен тәьмин итеү. Халыҡтың етеш йәшәүен нисек тәьмин итергә? Уның матди хәле дәүләттең ниндәй ижтимағи сәйәсәт алып барыуына һәм иҡтисадтың ниндәй кимәлдә үҫешкән булыуына бәйле? Дәүләт әһелдәре ижтимағи сәйәсәтте дөрөҫ алып барһа, граждандарҙың йәшәү кимәле лә әкренләп яҡшыра, шулай уҡ ил иҡтисады ла эҙмә-эҙлекле рәүештә үҫә. Был - күптән билдәле факт.

Был бәйләнеште аныҡыраҡ күҙ алдына килтерер өсөн, тарихҡа, атап әйткәндә - XVIII-XIX быуаттарға күҙ һалайыҡ. XV-XVII быуаттарҙа илдең иҡтисадын тотороҡло итеү, халыҡтың үҙ йөкләмәләрен тулыһынса һәм бер һүҙһеҙ үтәүенә өлгәшеү маҡсатында Рус дәүләте һалым йыйған ваҡытта крәҫтиәндәрҙе ҡурҡытыу һәм туранан-тура мәжбүр итеү ысулын әүҙем файҙалана. Шуға ла, өҫтәүенә, ил иҡтисадының түбән кимәлдә булыуы һәм халыҡ һанының артыуы халыҡ араһында ризаһыҙлыҡтарға сәбәпсе була, ижтимағи көсөргәнештәргә килтерә. Һөҙөмтәлә, төрлө йылдарҙа ҙур күтәрелештәр - Степан Разин, Емельян Пугачев, Кондрат Булавин кеүек юлбашсылар етәкләгән крәҫтиән һуғыштары ҡабына. Был һуғыштар эҙһеҙ үтмәй, әлбиттә: дәүләт әһелдәре ижтимағи хәлде көйләргә, крәҫтиәндәрҙе тынысландырырға тырыша башлай. Һөҙөмтәлә, XVIII быуаттың икенсе яртыһынан алып XIX быуат аҙаҡтарына тиклем булып үткән ваҡиғалар ярҙамында дәүләт менән йәмғиәт араһында бәйләнештәр нығый, үҫә. Ә ниндәй ваҡиғалар тураһында һүҙ бара һуң? Тәү сиратта, дәүләттең крәҫтиән тормошона иғтибарын арттырыуы тураһында.

XVIII быуаттың икенсе яртыһынан Рәсәйҙең көнбайыш өлөшөндә "Генераль межалау" тип аталған ер үлсәү программаһын тормошҡа ашырыу башлана. Был эштең маҡсаты - халыҡтың ерен яңынан үлсәп, һәр кемгә яңынан ер биреү. Быға тиклем, әйтәйек, бер кешенең ере төрлө урындарҙа утрау-утрау булып һибелгән булһа, Генераль межалау кампанияһы башлау өсөн ҡаҙнанан аҡса бүленгәс, ере булған һәр кемгә яңы ерҙәр биреү башланған. Был ерҙәр дөрөҫ геометрик фигура формаһында бүленеп, ер эшкәртеүселәргә бер типтағы таныҡлыҡ тапшырылған. Ошо ябай ғына мәшәҡәттәр ярҙамында халыҡтың көнкүреше лә яҡшырған, ҡаҙнаға аҡса ла даими рәүештә килә башлаған. Иң мөһиме, ижтимағи көсөргәнешлелек һүрелдерелгән. Халыҡҡа нимә кәрәк? Ер бирелеп, үҙ алдына эшләү мөмкинлеге булдырылһа, шул еткән. Хәҙер халыҡҡа бер урында эшләү мөмкинлеге бирелгәс, ул баҫыуында игенен дә, малға ашата торған культураларын да, ул заман өсөн яңы аҙыҡ - картуфын да, башҡаһын да сәскән. Шулай итеп, быға тиклем башлыса баҫыуҙарҙа өс культура сәселһә, Генераль межалауҙан һуң күп төрлө культуралар үҫтереү ҙә тарала башлаған.

Генераль межалау эше бик оҙаҡ - 100 йыл самаһы барған. Ерҙе үлсәү артабан "махсус межалау" сәйәсәте булараҡ дауам иттерелгән. Был ыңғай хәрәкәт иң тәүҙә халыҡ өсөн уңайлылыҡ килтерһә, шул уҡ ваҡытта дәүләт ҡаҙнаһына ла бихисап килем килтергән. XIX быуаттаРәсәй иҡтисады һәм ижтимағи сәйәсәте быға са күрелмәгән юғарылыҡты яулай. XIX быуатта пугачевтар ҙа, булавиндар ҙа, разиндар ҙа юҡ. Сөнки халыҡ туҡ, шулай булғас, ҡәнәғәт көн күрә. Межалау эше аҙағынаса еткерелмәй ҡала - был эшкә билдәле ваҡиға - XX быуат баштарындағы революция ҡамасаулай.

Ошоларҙан сығып әйткәндә, бөгөнгө ысынбарлыҡта дәүләт халыҡтың үҙаңын үҙгәртеүгә нығыраҡ иғтибар итергә тейеш. Сөнки дәүләт системаһы теләмәһә, халыҡтың менталитеты ла үҙгәрә һалмай.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘНЕҢ КӨЙҺӘ...

## аҡса һана

■ Джон Хопкинс балалар үҙәге хеҙмәткәрҙәренең тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, организмға D витамыны етешмәһә, балаларҙа аҙ ҡанлылыҡ барлыҡҡа килеү хәүефе күтәрелә. 10 меңдән ашыу баланы тикшереп ҡарағандан һуң, D витамины кимәле гемоглобины түбән булған балаларҙа кәмерәк булыуы асыҡланған. Шулай уҡ афроамериканлылар аҡ тиреле балаларға ҡарағанда анемия менән күберәк яфалана икән. Быға тиклем "ҡояшлы витамин" һәм анемия араһында бәйләнеш аҙағына тиклем асыҡланмаған, шулай ҙа ғалимдар был витаминдың эритроциттарҙың бүленеп сығыуына тәьҫир итеүен раҫлаған да инде.

■ Массачусетс университеты тикшеренеүселәре кешелә уны даими рәүештә көрәшкә әтәреп тороусы психологик мохтажлыҡ бар, тип раҫлай. Тап ошо кешеләрҙе һуғыш башларға, төрлө енәйәттәр яһарға, үҙ-ара талаштар, низағтар, шул иҫәптән интернетта үҙ битен булдырырға ла этәрә икән. Хәҙерге заман психологияһы ни тиклем алға китһә лә, белгестәр был проблеманы нисек еңергә икәнлеген билдәләй алмаған.

■ ООН мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, Рәсәй һәр өсөнсө кешеһе һимеҙлек менән яфаланыусы егерме дәүләттең рәсми булмаған исемлегенә ингән. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы хатта халыҡҡа сәләмәтлекте ҡайтарыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеге тураһында айырым ҡарар сығарған. Етәкселәр рәсәйҙәрҙе йәйәү йөрөргә, тәүлегенә 8 грамдан артыҡ тоҙ ҡулланмаҫҡа һәм ләк-емеш, йәшелсә менән күберәк туҡланырға саҡырмаҡсы. Рәсәй хәҙер артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар һаны буйынса илдәр араһында өсөнсө урында тора. Барыһына ла туҡланыу мәҙәниәте ғәйепле, тип саң ҡаға диетологтар. Һуңғы йылдарҙа уртаса статистик рәсәйленең өҫтәлен ярымфабрикаттар һәм майонез биләй икән. Белгестәр, һимеҙлек барлыҡҡа килеүҙең төп сәбәбе ошонда, тип фаразлай.

■ Әйләнә-тирәгеҙҙәге кешеләр төрлө ҡылыҡтары менән йәнегеҙгә тейә башлаһа, ҡыштырлатып ҡына аҡсағыҙҙы һанап алығыҙ. Миннесота университеты ғалимдары кешеләрҙе ике төркөмгә йыйған да, тәүге төркөмгә 80 йөҙ долларлыҡ купюра, ә икенсеһенә ҡырҡылған ябай ҡағыҙ иҫәпләргә ҡушҡан, йәнәһе, быны менән улар ҡатнашыусыларҙың ҡулдарының сослоғон тикшерә. Бынан һуң барыһы ла компьютер программаһы менән туп ташлау уйыны уйнаған, әммә быны береһе лә белмәгән һәм ысын кеше менән уйнайым, тип иҫәпләгән. Ғалимдар программаны махсус рәүештә шулай көйләгән, компьютер уйынсыны төрлө ҡылыҡтары менән сығырынан сығарырға маташҡан. Уйын алдынан аҡса һанаусылар үҙҙәрен күпкә яҡшыраҡ тойған һәм бер нәмәгә лә иғтибар бирмәп бармаған. Икенсе бер тәжрибә барышында унда ҡатнашыусылар ҡулдарын эҫе һыуға тығырға тейеш булған. Аҡса һанаусылар ҡулдарын эҫе һыуҙа оҙағыраҡ тота алған. Ғалимдар әйтеүенсә, аҡса купюраһына тейеп алыу кешенең үҙенә ҡуйған баһаһын күтәрә, үҙенә ышанысын арттыра, һөҙөмтәлә, ул ауыртыуҙы ла еңел кисерә. Әйткәндәй, быға тиклем билдәле булыуынса, аҡсанан кешеләр аҡыллана, етмәһә, аҡсалы кешеләрҙең йоҡоһо ла яҡшыраҡ була.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ҮЛЕМ АЛДЫНАН...

## биш үкенес



**Бронни Вэе - Австралия яҙыусыһы. Бер нисә йыл буйы ул дауахананан һуңғы көндәрен йәшәргә тип өйҙәренә ҡайтарылған өмөтһөҙ пациенттарҙы тәрбиәләй. Бөтә был кешеләр ҙә хәтирәләре һәм үкенестәре менән уртаҡлашҡанда уға яҡынса бер үк нәмәләр тураһында һөйләй һәм был яҙыусы ҡатынға шундай ныҡ тәьҫир итә, һөҙөмтәлә ул "Үлемгә дусарҙарҙың биш үкенесе" тигән философик әҫәр яҙа. Китап шундуҡ донъяла иң күп телгә алынған әҫәрҙәрҙең береһенә әүерелә. Вэе үҙе әйтеүенсә, ул был әҫәре менән үҙенә лә, башҡаларға ла был тормошта бөтәһен дә дөрөҫ эшләйбеҙме икән, тип уйланырға форсат бирергә теләгән, сөнки ҡайһы бер нәмәләрҙе яҡшы яҡҡа үҙгәртеү өсөн беҙҙең ваҡыт бар әле, ти ул. Яҙыусы һығымталарына психолог Л.Свешникова аңлатма бирә.**

**1-се үкенес:** ***Башҡалар минән көткәнсә түгел, ә үҙемсә йәшәргә ҡыйыулығым етмәне.***

Үткәндәрен байҡап, кешеләр үҙ тормошонда хыялланғандарының яртыһын да тормошҡа ашыра алмағанын аңлаған. Сөнки уларҙың һәр ваҡыт кем өсөндөр һәм ни өсөндөр башҡарылырға тейешле эштәре килеп сыҡҡан. Исмаһам, үҙендең иң мөһим теләктәрендә атҡарырға тырышырға кәрәк, тип яҙа Бронни. Был хаҡтағы уй кешеләрҙең һаулыҡтарын юғалтҡас ҡына иҫенә килеп төшә, ләкин инде һуң була.

***Психолог аңлатмаһы:*** Беҙ хаталаныуҙан шул тиклем ҡурҡабыҙ һәм бер нәмә лә эшләмәйбеҙ. Хыялдың артынан эйәреүҙең һәр ваҡыт та уңышлы барып сыҡмау ихтималлығын аңлағанға күрә, үҙебеҙҙең унайлы һаҙлығыбыҙҙа ултырыуҙы дауам итәбеҙ, шулай хәүефһеҙерәк, тип үҙебеҙҙе ышандырырға тырышабыҙ. Ләкин хаталаныу - ул бит тәжрибә. Әгәр был тәжрибәне үтмәгән булһағыҙ, ул күңелегеҙгә үкенес һәм тынғыһыҙлап тороусы хис-тойғолар сифатында күренмәҫ йөк булып, һәр ваҡыт яңығыҙҙан киләсәк. Ә быны һин яҙмышыңды һайлау өсөн яуаплылыҡ алырға ҡурҡмайһың икән, шунда ғына һин ирекле.

**2-се үкенес:** ***Бигерәк күп эшләнем.***

Эксцентрик холҡо менән билдәле булған Британия миллиардеры Ричард Брэнсон да хатта: "Үлем түшәгендә ятҡан бер кемдең дә, офиста бигерәк аҙ ваҡытымды үткәрҙем бит, тип үкенгәне юҡ әле", - тигән. Һәм Бронни үҙенең хәстәрлекле ҡулдары аша үткән һәр бер ирҙең эшкә бик күп ваҡыт сарыф итеүе өсөн үкенеүе хаҡында яҙа. Улар балаларының нисек үҫеп етеүен дә күрмәй ҡалған, ҡатындары һәм ата-әсәләренә лә бик аҙ ваҡыт бүлгән. Ә бит тормош рәүештәрен ябайлаштырған хәлдә, ул тиклем күп эшләргә лә тура килмәгән булыр ине. Йәшәү өсөн дә ваҡыт ҡалыр ине.

***Психолог аңлатмаһы:*** Күптәр шулай үҙе теләгән өсөн түгел, ә үҙҙәренән ҡасып, карьераға өлгәшә. Асылда, быларҙың кәрәге юҡ икәнлекте күреүҙән ҡурҡып, беҙ артҡа ла әйләнеп ҡарамайынса, яңы уңыштарға ынтылабыҙ.

**3-сө үкенес:** ***Хис-тойғоларымды белдерергә йөрьәт итмәнем.***

Кемдер туғандары менән мөнәсәбәтен боҙоуҙан ҡурҡып, хистәрен тыя, икенселәр янындағылар менән тыныслыҡ һаҡлайым тип өндәшмәй, кемдер ваҡытында үҙенең һөйөүе хаҡында белдермәй ҡалып, ғүмеренең ахырына ҡәҙәр үкенә. Әгәр ҙә беҙ тура әйтеүҙән ҡурҡмаһаҡ, ти Бронни үҙенең китабында, әйләнә-тирәләгеләр менән мөнәсәбәттәребеҙҙе яңы, юғарыраҡ кимәлгә сығара алыр инек. Йә булмаһа, был кешеләр тормошобоҙҙан юғалыр ине. Бынан тыш, врачтар һәм психологтар фекере лә билдәле: пациенттар кире эмоцияларын эсендә тыйып тотмаһа, күп сирҙәрҙән ҡотолорға мөмкин булыр ине.

***Психолог аңлатмаһы:*** Үҙ тормошо өсөн яуаплылыҡ алыу һәләте кешенең өлгөрөп етеүен билдәләүсе төп сифат. Тимәк, беҙ сабый саҡта ғына үҙебеҙ була алабыҙ, ә аҙаҡ ата-әсәләребеҙ һәм социум ҡушҡанса йәшәй башлайбыҙ. Үҙебеҙҙе тыйып тотҡан мәлдә беҙгә бик ҡыйын була, ләкин беҙ уның сәбәптәре хаҡында уйланмайбыҙ. Һәр ваҡыт үҙегеҙҙән, минең үҙемә нимә кәрәк һуң, тип һорағыҙ. Ошо һорауға ғәҙел һәм дөрөҫ яуап тапһағыҙ, һеҙгә үкенергә тура килмәҫ.

**4-се үкенес:** ***Дуҫтарыма аҙ ваҡыт бүлдем.***

Үлемгә дусар булғандарҙың бөтәһе лә үҙҙәренең иҫке дуҫтары тураһында телгә алған: осрашыуҙар һәм аралашыу өсөн ваҡыт табырға кәрәк булған, тип үкенгән. Теге донъяның тупһаһы алдында торғанда, ғөмүмән, статус һәм аҡса берәүҙе лә ҡыҙыҡһындырмай икән ул. Бөтәһе лә үҙҙәренең яҡындары һәм ҡәҙерлеләре хаҡында ғына һөйләй.

***Психолог аңлатмаһы:*** Кешеләр иҫке дуҫтарына ҡарағанда, ҡасандыр улар менән бергә булған саҡтағы күңел тороштарын, йәшлектәге бәхет һәм комфорт кисерештәрен һағына.

**5-се үкенес:** ***Үҙ бәхетенә үҙе юл япҡан.***

Бронни шундай һығымта яһай: беҙ бәхеттең күктән төшмәүен, ә үҙебеҙҙең һайлау һөҙөмтәһе икәнлеген аңламайбыҙ. Был торошто тотоу өсөн үҙеңдең комфорт зонаңдан һикереп төшөп ҡалырға кәрәк. Тормошоңдо үҙгәртеүҙән ҡурҡыу үҙеңде лә, башҡаларҙы ла, бөтәһе лә һәйбәт, тип ышандырырға мәжбүр итә. Фәҡәт үлем алдынан ғына башҡаларҙың фекере мәғәнәһен юғалта.

***Психолог аңлатмаһы:*** Пациенттарыма мин шундай күнегеү тәҡдим итәм: бер бит ҡағыҙ алып, уны ос бағанаға бүлергә. Тәүгеһендә тормошоғоҙҙа үҙегеҙҙе уларҙың күҙ алдына ла килтерә алмаған өс нәмәне (яҡын кешеләрегеҙ, мөһим мәғәнә аңлатҡан ниндәйҙер сифаттар йәки әйберҙәр һ.б.); икенсеһенә - һеҙҙең ҡәҙимге тормош ағышын билдәләгән 7 пунктты күрһәтегеҙ. Өсөнсө бағанаға хыялығыҙҙан 12 миҫал яҙығыҙ. Әлбиттә, был күнегеүҙәр тормошоғоҙҙон аҫтын өҫкә килтермәҫ, ләкин һеҙ үҙегеҙ хаҡында ҡыҙыҡ нәмәләр белерһегеҙ, үҙегеҙҙе яҡшыраҡ аңларһығыҙ.

Юғарыла һанап кителгән биш үкенес асылда бер нәмә хаҡында - кешенең ирекле һәм бойондороҡһоҙ шәхес икәнлеге тураһында һөйләй. "Шулай килеп сыҡты инде" тип түгел, ә "Мин шулай килеп сыҡһын өсөн тырыштым" тип һөйләргә өйрәнегеҙ. Улар араһындағы айырманы һиҙеү менән һеҙ үҙегеҙҙе ирекле лә, бәхетле лә итеп тойорһоғоҙ.

**Фатиха ИШБИРҘИНА**
**әҙерләне.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

**Һижри яңы йыл яҡынлаша (4 ноябрь - 1-се мөхәррәм). Аллаһы Тәғәләнең һәм Уның Рәсүленең ҡушыуы буйынса мосолмандарҙың Мәккәнән Мәҙинәгә күсеүенән башланған һижри хисап 1435 йылын ҡыуа. Тап 1435 йыл элек йөрәктәре иман менән тулған, күңелдәрендә Раббыға һәм Бәйғәмбәргә мөхәббәт булған ҡыйыу сәхәбәләр дин хаҡына тыуған яҡтарын ҡалдырып, һижра - күсенеү яһай. Йорттары, йылдар буйы йыйылған байлыҡтары, тәбиғи мөхит һәм алда көткән билдәһеҙлек уларҙы был маҡсаттарынан тайпылдырмай. Маҡсаттарынан шулай уҡ бер тере йән күренмәгән сүллек, ҡояштың көйҙөргөс нурҙары, аҙыҡ-түлек етешмәүе, Мәккә мөшриктәренең туҡтауһыҙ эҙәрләкләүе, 500 саҡрымлыҡ юлда уларҙы уратып алған һанһыҙ ҡурҡыныстар ҙа һүрелдерә алмай.**



# ХАЛЫҠ ҮҘЕ ҮҘГӘРМӘҺӘ,

## Аллаһы уны үҙгәртмәҫ

Һижра - күсенеү тигәнде аңлата. Мәккә мосолмандарының Мәҙинәгә күсенеүе, уларҙың шәхси теләге, проблемаһыҙ тормош, сикһеҙ мөмкинлектәр, хисапһыҙ байлыҡ артынан ҡыуыу түгел. Был күсенеү имандарын һаҡлап ҡалыр өсөн бар йөрәктәре менән бәйләнгән изге ҡаланан һағышлы айырылыу ул. Мәккә мөшриктәренең залимлыҡтары бөтә сиктәрҙе үткәс, Бәйғәмбәрҙең изге саҡырыуы ҡаты йөрәкле бәҙәүиҙәр тарафынан инҡар ителгәс, ҡыҫым көндән-көн артҡас, мосолмандарға Йәсриб халҡы аша рух юлдаштарын бүләк итә Аллаһы Тәғәлә. Диндәрен һаҡлап ҡалыу, фанилыҡты һәм баҡыйлыҡты ҡотҡарыу өсөн үтәлгән итәғәтлек, күскенсе мөһәжирҙәрҙе иң юғары баҫҡыстарға күтәрә. Улар үҙҙәренең ғәмәлдәре менән имандарының камиллығын раҫлай, бүләк итеп Аллаһы Тәғәлә уларға ике донъя бәхете бирә. Улар ерҙәге ғүмерҙәрендә үк йәннәт вәғәҙә ителгән бәхетлеләр исемлегенә эләгә, ә был донъя бүләге булып бер нисә йылдан һуң уларҙың меңләгән, миллионлаған кешеләрҙең рухи остаздарына әйләнеүе тора. Улар бер быуындарға ла хас булмаған ғәҙел йәмғиәт төҙөүҙә Бәйғәмбәрҙең иң яҡын юлдаштары була.

Һижраны ғалимдар, бер хәлдән икенсе хәлгә күсеү, тип тә аңлата. Йәғни, иманына зыян килмәһен өсөн, баҡый донъяны ҡотҡарыу маҡсатында кешенең үҙен уратып алған насар йоғонтоло йәмғиәттән йыраҡлашыуы, ситләшеүе, үҙенең эске донъяһын боҙоусы, ҡараңғылыҡҡа этәреүсе бысраҡлыҡтарҙан, гонаһ, хаталарҙан таҙарыныуы. Ул ваҡытта сәхәбәләргә бер ҡаланан икенсе ҡалаға күсенеп, һижра эшләү үтә лә мөһим булғаны кеүек, бөгөн беҙгә лә бер хәлдән икенсе хәлгә күсеп, һижра эшләүебеҙ мөһим. Эйе, беҙҙе һәм сәхәбәләрҙе сағыштырып булмай, уларҙың иманы, дингә ынтылышы, Аллаһы Тәғәләне һәм уның Бәйғәмбәрен һөйөүе янында беҙҙең иманыбыҙ бөйөк даръялар менән бәләкәй генә шишмәне сағыштырыу кеүек күренә. Ә шулай ҙа...

Шуныһы ҡыҙғаныс: беҙҙең тормошобоҙҙа шәхси ихтыяждарыбыҙ беренсе урынға сыҡты, маҡсаттарыбыҙ ҡасан да булһа бөтә торған һәм беҙгә ҡабаттан әйләнеп ҡайтмаясаҡ әйберҙәр менән сикләнде. Улар беҙҙең бар зиһенебеҙҙе биләп алды, ҡиммәттәребеҙ, уйҙарыбыҙ, тормошобоҙ улар тирәләй ҡорола. Донъя байлыҡтарын, ялтырауыҡтарын яратыуыбыҙ тулы ғәфләт, вайымһыҙлыҡ хәленә килтерҙе: беҙ ғәмәлдәребеҙҙең, йәшәйешебеҙҙең, ашаған ризығыбыҙҙың, һөйләгән һүҙҙәребеҙҙең Аллаһы Тәғәлә әмерҙәре менән тап килеү-килмәүе хаҡында уйлап та бирмәйбеҙ. Күптәребеҙ, үҙ халҡыбыҙҙың тарихына битарафлыҡ һәм алһыу күҙлектәр аша ҡарап, ислам дине олатай-өләсәйҙәр ҡалдығы, тип иҫәпләй. Изге Ҡөрьән китап кәштәләрендә саңға туҙып, йылдар буйы асылмаған килеш ята. Тиҙ арала нәфсене, хайуани теләктәрҙе туйындырыу тормош мәғәнәһенә әйләнә. Зина, эскелек, ҡомар, күрәҙәселек кеүек үлемесле гонаһтар араларҙа иркен йөрөй. Динде аңлау зинанан һуң никах уҡыуға, һурпа эсеп, ғәйбәт һатыуға ҡайтып ҡала. Нимәһе үкенес: күпме генә йәшәмәһен, йәшәйештең төп өс һорауы булған һорауҙарға яуап тапмайынса (кем мин, мин ҡайҙан киләм һәм ҡайҙа йүнәләм) был донъянан китеп барған инсандар етерлек беҙҙең заманда.

Эйе, ошо хәлебеҙҙән сығыу өсөн беҙгә лә һижра мотлаҡ. Юҡ, тыуған илебеҙҙе, өйҙәребеҙҙе ҡалдырып, диңгеҙ аръяғына күсенеү түгел. Ә аңыбыҙҙы томалаған тышлыҡтарҙан, күҙебеҙҙе ҡаплаған пәрҙәләрҙән, ҡәлбебеҙҙе йоҙаҡлаған гонаһтарҙан арынып, булмышыбыҙға - хаҡ булмышыбыҙға, Аллаһы Тәғәлә беҙҙе яралтҡан булмышыбыҙға, кешенең яратылыуы сәбәпле булған ҡиммәттәргә йүнәлергә, күсенергә, ҡайтырға тейешлебеҙ.

Тағы ла беҙҙең һижрабыҙ рухи, социаль, матди (һуңғы икеһе ислам динендә хәләл юлдар менән өлгәшелгәндә инҡар ителмәй) кимәлгә бейегерәк күтәрелеү ул. Билдәле бер хәҙистә "Хаҡ күсенеүсе - ул гонаһтарҙы һәм хаталарҙы ҡалдырыусы", тип әйтелә. Аллаһы Тәғәләнең ниғмәттәренең яңы офоҡтарын асыу, уның шәфәғәтенә йүнәлеү - былар беҙҙең өсөн иң кәрәкле йүнәлештәр бөгөнгө көнөбөҙҙә.

Үҙебеҙҙең кем булыуыбыҙҙы, ҡайҙан килеүебеҙҙе һәм ҡайҙа йүнәлеүебеҙҙе яҡшыраҡ күҙ алдына килтергән һайын, маҡсаттарыбыҙҙы аныҡ билдәләгәндә генә үҙ ынтылыштарыбыҙға етә аласаҡбыҙ. Иң үкенеслеһе шул: үҙҙәрен уңышһыҙ һәм бәхетһеҙ, тип һанаған кешеләр - үҙҙәрен ҡулға ала алмаусылар, маҡсаттарын, идеалдарын билдәләмәүселәр, тормош ҡиммәттәрен дөрөҫ һайламаусылар, ғүмерҙәрен, ваҡыттарын бушҡа үткәреүселәр. Изге Ҡөрьәндә "Берәй халыҡ үҙе үҙгәрмәһә, Аллаһ уларҙы үҙгәртмәҫ. Аллаһ берәй тоҡомға яза бирергә теләнеме, ул яза, һис шикһеҙ, биреләсәк *(кире сигенеү булмаҫ)*. Аллаһтан башҡа зат уларға *(кешеләргә)* ярҙам итә алмаҫ", тип әйтелә. Эске донъяһын һәм ҡылыҡтарын, көндәлек күренештәргә ҡарашын яҡшы яҡҡа үҙгәртеп, кеше үҙенә Аллаһы Тәғәлә шәфәғәтен һәм Уның ризалығын тарта. Һәм, киреһенсә, рухи яҡтан кирегә үҙгәрештәр башланһа, әҙәм балаһы үҙен төрлө гонаһтар аша түбәнгә төшөрһә, ул үҙенә ҡотолоп булмаҫ язаны яҡынайта. Аллаһы Тәғәләнең алыштырғыһыҙ ҡанундары шулай.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Ун етенсе көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. "Кайзен" концепцияһы - даими һәм сикһеҙ камиллашыу.**

"Кайзен" концепцияһы - ул көн һайын тормошоңдо һәр яҡлап яҡшырта барыуҙы аңлата. Был программаны үтәй башлап, һеҙ көн һайын тормошоғоҙҙо яҡшырта барыусы бәләкәй генә булһа ла аҙымдар яһарға тейешһегеҙ. "Мега тормош"тоң асылы шунда ла инде. "Кайзен" ысулын бөгөн үк ҡуллана башлағыҙ.

а) Мемуарҙар яҙа башлағыҙ.

б) Телевизорҙы һүндерегеҙ һәм янығыҙҙағы кешеләргә иғтибар итегеҙ.

в) Элекке биш дуҫығыҙға хат яҙығыҙ (бик һәйбәт ғәҙәт!).

г) Бөгөн башлаған эшегеҙҙе тамамлап ҡуйығыҙ.

д) Күнегеүҙәр яһағыҙ һәм берәй көтөлмәгән ҡылыҡҡа юл ҡуйығыҙ.

е) Сит телдәр курсына яҙылығыҙ, музыка дәрестәре ала башлағыҙ.

ж) Өс төрлө гәзит уҡып, уларҙың баш мөхәррирҙәренә хат яҙығыҙ.

з) Бөгөн кис театрға, концертҡа йәки цирк тамашаһына барығыҙ.

и)Радио тыңлағыҙ, үҙегеҙҙең финанс хәлегеҙҙе ҡайтанан ҡарап сығығыҙ.

к) Үҙегеҙҙе үҙегеҙ теләгән кеше итеп күҙ алдына килтерегеҙ.

**Икенсе бүлек: тән. Үҙегеҙҙе энергия менән тоҡандырығыҙ**

Тейешле энергияға эйә булмай тороп, ҡуйылған маҡсаттарығыҙға өлгәшә алмаясаҡһығыҙ. Ганди тәүлегенә дүртәр сәғәт кенә йоҡлаған. Уның энергияһы ла, үҙ илен бойондороҡһоҙлоҡҡа илтеү теләге лә көслө булған. Энергетика кимәлен күтәреүҙең бер нисә һөҙөмтәле ысулы бар. Шуларҙың икәүһен үҙегеҙҙең көндәлек күнекмәгеҙгә индереү өсөн һайлап алығыҙ.

а) Әүҙем йәшәгеҙ. Парадокс, ләкин ни тиклем көс түкһәгеҙ, энергияғыҙ шул тиклем күберәк буласаҡ.

б) Ошо хеҙмәтемдә телгә алынған тәрән һулыш системаһын файҙаланығыҙ.

в)Энергетикаға бай ризыҡ төрҙәре - йәшелсә-емеш менән туҡланығыҙ.

г) Юҡ-барға борсолоуҙарға бик күп энергия сарыф ителә. Тынысланығыҙ, медитация эшләгеҙ, көсөргәнештән ҡотолоғоҙ.

д)Төшкө аштан һуң кәмендә 10 минут саф һауала йөрөп килегеҙ.

е) Ятаҡан музыкағыҙҙы тыңлағыҙ.

ж) Бик арыған саҡта 15 минут булһа ла серем итеп алығыҙ.

**Өсөнсө бүлек: характер. Көндәлеккә күберәк яҙығыҙ.**

"Уңыш журналы"н асығыҙ һәм үҙегеҙҙең уйығыҙҙа, тормошоғоҙҙа булған үҙгәрештәрҙе ентекләп яҙығыҙ. Үҙегеҙҙә ниндәй ыңғай үҙгәрештәр һиҙәһегеҙ? Алдығыҙҙа ниндәй ҡатмарлыҡтар тора һәм һеҙ уларҙы еңеп сығыу, 1-се көндә ҡуйған маҡсаттарығыҙға өлгәшеү өсөн ниндәй саралар күрергә йыйынаһығыҙ? Әлеге көнгә ҡарата "Мега тормош" программаһынан өйрәнгән бөтөн стратегия һәм идеяларҙы яҙып сығығыҙ. Хәҙер инде үҙегеҙ лайыҡ булған идеаль тормошҡа яҡынайыуығыҙ менән үҙегеҙҙе ҡотлаһағыҙ ҙа була.

**Робин ШАРМА.**



## 4 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Крепкий орешек".
07.55 "Кубанские казаки".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Офицеры". Военная драма.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Романовы". К 400-летию царской династии.
13.15 "Москва слеза не верит". Мелодрама (16+).
16.10 Праздничный концерт. В программе: группа "Любэ", Леонид Агутин, Анжелика Варум, Тото Кутуньо.
18.00 "Ледниковый период".
21.00 "Время".
22.00 "ДОстояние РЕспублики".
24.00 "Поклонница". Драма (16+).
02.00 "Море любви". Триллер (16+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00 "Сватовство гусара". Музыкальная комедия.
06.25 "Семь нянек". Комедия.
08.00 "Мужики!..". Мелодрама.
10.00 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт (16+).
11.55 "Только о любви". Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Только о любви". Продолжение (12+).
20.00 "Вести".
20.30 "Легенда № 17". Биографическая драма (12+).
23.05 "Подстава". Детективный сериал (12+).
03.15 "Ехали в трамвае Ильф и Петров". Комедия.

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Филүс Ҡаҙаҡбаев (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". "Йәнғәле Вәхитов бейеүҙәре" (6+)
18.00 "Урал моңо - 2010" (12+)
21.00 "Кис ултырып". Зилә һәм Хәсән Усмановтар (12+)

### БСТ
**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз).**
**07.15 "Уфа - город дружбы и единства" (12+).**
**09.30 "Орнамент".**
**10.00, 11.30 Новости недели (на башк. яз.) (16+).**
**10.30 "Книга сказок".**
**10.45 "Ғәләмәт донъя".**
**11.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**12.00 "Специальный репортаж" (16+).**
**12.15 "Учим башкирский язык".**
**12.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**13.00 "Указом Екатерины Великой".**
**13.30, 19.00 "Историческая среда".**
**16.00 "Юлдаш йыры-2013" (6+).**
**21.30 Новости (на русс. яз.).**
**22.00 "Следопыт" (6+).**
**22.30 "Прогулки по старой Уфе" (6+).**
**01.00, 01.45 "Единое время" (12+).**
**02.00 Художественный фильм.**
**03.30 Ф.Буляков "Половецкая мистерия" (12+).**
**05.15 Р.Кулдавлетов "Стриженый табун". Спектакль (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 5 НОЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Крик совы". Детективный сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.30 "Германская головоломка".
01.25, 03.05 "Возвращение в голубую лагуну". Драма (12+).
03.00 Новости.
03.20 "Народная медицина" (12+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10, 19.40 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Тайны следствия-10". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.40 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Берега моей мечты". Драматический сериал. 1-4 серии (12+).
00.40 "Девчата". (16+).
01.25 "Тайник" (16+).
03.25 "Чак-5" (16+).
04.20 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Зифа Нагаева (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 Бибисара Азаматова йырлай (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Сыңла, ҡумыҙ". Концерт. 2011й. (6+)
21.00 "Кис ултырып". Фәрүәз Урманшин (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Зеркальце".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 18.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00, 23.00 "Песня года".**
**13.45, 05.30 "Мелодии души". Концерт (12+).**
**14.45 "Автограф".**
**15.15 "Книга сказок".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30 Новости (на русс. яз.).**
**16.45 "Отдел культуры" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Үткән ғүмер" (6+).**
**19.00 "Телецентр" (на башк.яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Власть отвечает" (16+).**
**20.30 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.30 "Живая память" (6+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**01.45 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**03.30 Н.Асанбаев. "Родник" (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 6 НОЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Крик совы". 3-я и 4-я серии (16+).
23.30 "Германская головоломка" (16+).
01.25, 03.05 "Поцелуй меня на прощание". Комедия (12+).
03.00 Новости.
03.25 "Жизнь как кино" (12+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть" .
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Тайны следствия-10". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Берега моей мечты". Сериал (16+).
23.45 "Специальный корреспондент" (16+).
00.50 "Кто не пускает нас на Марс?". Док. фильм.
01.55 "Честный детектив" (16+).
02.25 "Отпуск за свой счет".
03.45 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Урал Иҙелбаев(6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". Риф Бикбаев. Концерт (6+)
21.00 "Юлдаш йыры". Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 18.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Песня года".**
**13.45 "Башҡорт йыры-2013". II тур".**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров".**
**15.45 "Сәмәр".**
**16.00 "Городок АЮЯ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30 Новости (на русс. яз.).**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә".**
**19.00 Телецентр (на баш. яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Историческая среда".**
**23.00 Диспут-клуб "Пятый угол" (16+).**
**23.45 "Позывной "Барс" (16+).**
**24.00 "Следопыт" (6+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 И.Юзеев. Соловьи прилетели" (12+).**
**05.30 "Мелодии души" (12+).**

## 7 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости.
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Крик совы" Сериал (16+).
23.30 "Германская головоломка" (16+).
01.25, 03.05 "Жюстин". Драма (16+).
03.00 Новости.
03.50 "Коммунальный рай" (12+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "От всей души".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Тайны следствия-10". (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Берега моей мечты". Сериал (16+) .
22.50 "Поединок" (12+).
00.25 "По следам Ивана Сусанина" (12+).
01.30 "Отпуск за свой счет". Худ. фильм.
02.55 "Закон и порядок-18" (16+).
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Рәсүл Лоғаманов (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 Фәрит Яҡшығолов йырлай (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Хәлит Фәтихов. Концерт (6+)
21.30 "Мөғжизәгә килә ышанғым". Вәхит Хызыров (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Песня года".**
**13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Хазина. Иншар Солтанбаев".**
**15.15 "Ғәләмәт донъя".**
**15.45 "Шәп арба".**
**16.00"Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Власть отвечает" (16+).**
**17.00 "История признания" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Сәләм+" (12+).**
**18.25 Хоккей. Чемпионат МХЛ.**
**20.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Лото 6 из 40+ Джокер".**
**21.15 "Деловой Башкортостан".**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 "ФК "Уфа"**
**23.30 "Байыҡ-2013".**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 М.Карим. "Похищение девушки" (12+).**

## 8 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес".
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Музыкальный конкурс (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.35 "Чужой против хищников". Триллер (16+).
02.20 "Паттон". Биографическая драма (16+).

### РОССИЯ 1
05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.05 "Ауаз".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.15 Дневник Сочи-2014.
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести ПФО".
17.30 "Тайны следствия-10". (12+).
18.30 "Прямой эфир".
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Берега моей мечты". Сериал (12+).
23.50 "Живой звук".
01.15 "Невеста на заказ". Мелодрама (12+).
03.20 "Горячая десятка" (12+).
04.30 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Редик Фәсхетдинов (6+)
11.35 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома" (0+)
19.00 "Күңелемдең иләҫ-миләҫ сағы ". Зөһрә Фәйзуллина (6+)
21.15 "Ил ғүмере, ир ғүмере". Артур Туҡтағолов (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донъя".**
**11.00, 17.45, 00.15, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45, 18.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00, 23.00 "Песня года".**
**13.45, 05.15 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Автограф".**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "ФК "Уфа": даешь премьер-лигу!"**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.10 "Капитаномика" (12+).**
**20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.30 "Дарман".**
**01.00 "В минуты отдыха". Концерт (12+).**
**03.30 Ф.Буляков. "Заноза" (12+).**

## 9 НОЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.45, 06.10 "Петровка, 38". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
07.35 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Дисней-клуб". "Джейк и пираты Нетландии".
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Мисс Вселенная. Репортаж из-за кулис" (12+).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Небесный тихоход". Музыкальная комедия.
14.50 "Жизнь как сенсация" (16+).
15.55 "Куб" (12+).
16.55 "Голос. За кадром" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Ледниковый период".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Что? Где? Когда?"
00.10 "Случайный роман". Комедия (16+).
02.10 "Кейптаунская афера". Приключения (16+).
04.50 "Олег Ефремов. Голос внутри меня" (12+)..

### РОССИЯ 1
05.00 "Люди в океане". Драма.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Вести. Дежурная часть".
11.55 "Честный детектив" (16+).
12.25, 14.30 "Зимний вальс". Сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
16.40 "Субботний вечер".
17.55 "Танцы со звездами". Сезон-2013.
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Незабудки". Мелодраматический сериал (12+).
00.40 "Дорога, ведущая к счастью". Мелодрама (12+).
02.40 "Стрелки". Криминальная драма (16+).
04.35 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Автограф". Тәнзилә Дәүләтбирҙина (6+)
11.50 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 Илнар һәм Юлиә Ҡотдосовтар йырлай (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Мөғжизәле донъя һин, мөхәббәт". Стәрлетамаҡ дәүләт филармонияһы (6+)
18.00 "Форест Гамп". Фильм (12+)
21.00 "Кис ултырып". "Каруанһарай" төркөмө (6+)

### БСТ
**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Коралай" (на башк. яз.) (6+).**
**08.35 Мультфильм (на башк. яз.).**
**09.00 "Көндәлек. Федоровка районы" (12+).**
**09.30 "Сәләм+" (12+).**
**09.45 "Здоровое решение" (12+).**
**10.15 "Клио".**
**11.00 "Профили" (16+).**
**11.30 "Аль-Фатиха".**
**12.00 "Следопыт".**
**12.45 "Үткән ғүмер. 1970-е годы" (6+).**
**13.15 "Замандаштар" (12+).**
**13.45, 06.45 "Весело живем" (12+).**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 "Юлдаш йыры" (6+).**
**19.00 "Еду в деревню".**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Живое село" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Башҡорт йыры-2013. II тур".**
**22.45 "Баллада о времени" (16+).**
**00.30 Художественный фильм (16+).**
**03.30 Н.Гаитбай. "Весело живем". Спектакль (12+).**
**05.30 Н.Асанбаев "Семь девушек". Спектакль (12+).**

## 10 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.50, 06.10 "Огарева, 6". Детектив (12+).
06.00 Новости.
07.45 "Служу Отчизне!"
08.15 "Дисней-клуб". "Аладдин".
08.40 "Смешарики". "ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.30 "Романовы". Документально-игровой исторический фильм (12+).
13.30 "Свадебный переполох" (12+).
14.35 "Процесс". Мелодраматический сериал (16+).
18.40 "Повтори!" Шоу перевоплощений (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.00 Концерт к Дню сотрудника органов внутренних дел (16+).
00.30 Мисс Вселенная-2013 в Москве (16+).
02.25 "С меня хватит". Триллер (12+).

### РОССИЯ 1
05.20 "Опасные друзья". Криминальная драма.
07.20 "Вся Россия". "Хозяин Медвежьего края".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Городок. Дайджест".
11.45, 14.30 "Сила сердца". Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
16.05 "Смеяться разрешается".
18.00 "Битва хоров".
20.00 "Вести недели".
21.30 "Везучая". Мелодрама (12+).
23.30 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
01.20 "Фальшивая личина". Криминальная драма (16+).
03.15 "Планета собак".
03.50 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Автограф". Хисмәтулла Юлдашев (6+)
11.50 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Һуңғы Гәйнә". Спектакль (6+)
18.00 "Елғыуар". Фильм (6+)
20.00 "Йондоҙло сәғәт". Нәркәс Сиражетдинова (6+)
21.00 "Кис ултырып". Рәшиҙә Туйсина (12+)

### БСТ
**07.00 Новости (на баш. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома".**
**09.00 "Еду я в деревню".**
**09.30 "Живое село" (12+).**
**10.00 "Бауырһаҡ".**
**10.15 "Городок АЮЯ".**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Шәп арба".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30, 21.30 Новости недели.**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башкорттар".**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Замандаштар" (6+).**
**16.45 "Вестник Газпром трансгаз Уфа".**
**17.00 "Историческая среда".**
**17.30 "Хазина".**
**18.00, 05.45 "Автограф".**
**18.30 "Специальный репортаж" (16+).**
**18.45 "Институту развития образования РБ - 80 лет" (12+).**
**19.15, 21.15 "Деловой Башкортостан".**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Любимое дело".**
**20.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**20.30 "Время спорта" (16+).**
**21.00 " Лото 6 из 40 + Джокер".**
**21.15 "Бизнес-обзор".**
**22.00 "Байыҡ-2013".**
**23.00 "Вечер.com" (12+).**
**23.45 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00, 06.30 "Единое время" (16+).**
**02.15 Художественный фильм (16+).**
**03.30 "Дама без камелий" (12+).**
**06.15 "Весело живем" (12+).**

*ИҒЛАН*
Редакцияға тәжрибәле водитель талап ителә.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ФЕДОРОВКА РАЙОНЫ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**43-сө һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Тимербаев. Метрополитен. Шәжәрә. Азарт. Дерби. Үтәшева. Ралли. Бәкәлсәй. Сынға. Иммигрант. Төмән. Хәкимова. Төҫ. Буй. Ресторан. Фәйзуллин. Талаҡ. Мостафин. Пешка. Бирт. Цукини. Салауат. Әлифба. Нәрәтә. Йәшелсә. Драп. Мармелад. Плита. Свитер. Ифтира. Алюмин. Неон. **Вертикаль буйынса:** Торф. Үлмәсбай. Шәкүр. Йыуата. Шәрәк. Бисә. Урал. Мышы. Дастан. Һоҡот. Абдуллина. Төрмә. Тапма. Әмират. Егор. Саян. Аҡыл. Кәримов. Имән. Аттракцион. Иҙел. Тәсбих. Рәсем. Дарман. Әрме. Олатай. Силос. Әхирәт. Тәфтиш. Опера. Омар. Феодал. Аренда. Нәтижә.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# КИТАПХАНА...

## замандан ҡалышмай



**"Башинформ" Мәғлүмәт агентлығы хәбәр итеүенсә, Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала электрон китап һаҡлағыс барлыҡҡа килде.**

"Электрон китапхана"ны презентациялау сараһында БР Мәҙәниәт министрлығының беренсе урынбаҫары Валентина Латипова сығыш яһап, республиканың бөтә китапханалары һәм уҡыусылары өсөн был көн бик тә әһәмиәтле, тип билдәләне һәм Башҡортостанда йәшәүсе һәр бер кеше был мәҙәни ҡаҙаныш менән ҡуллана аласағына ышаныс белдерҙе.

Презентация алдынан килгән ҡунаҡтарға Милли китапхана бинаһына ингән капиталь ремонт үткәрелгән урынды, "Асыҡ мәхит" программаһы сиктәрендә һатып алынған яңы ҡорамалдарҙы күрһәттеләр. Башҡорт әҙәбиәте һәм крайҙы өйрәнеү бүлегендә сараға йыйылыусыларҙы документтарҙың штрих-кодтары нигеҙендә автоматлаштырылған китап биреү системаһы менән таныштырҙылар.

"Электрон китапхана" презентацияһы универсаль уҡыу залында үтте. Китапхана директоры Айгөл Моратова сараға йыйылыусыларҙы электрон һаҡлағыстың эш үҙенсәлектәре һәм принциптары менән таныштырҙы. "Полифорт" һәм "Xerox" компаниялары вәкилдәре электрон китапхана проектын бойомға ашырыу этаптары тураһында ентекле һөйләп, ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап бирҙе.

Атап әйткәндә, проект дүрт этапта тормошҡа ашырыла һәм хәҙерге ваҡытта ресурстың селтәр һаҡлағысына элекке йылдарҙа сканер аша күсереп баҫылған эштәрҙән 132 баҫма, алты аудио һәм бер видеоматериал ҡуйылған. Киләсәктә бүлектәр, әлегә улар һигеҙ, яңы материалдар менән тулыландырыласаҡ. Проект "Китапхана эшен үҫтереү" маҡсатлы программаһына ярашлы тормошҡа ашырыла. Быйыл милли электрон китапхананы булдырыуға республика бюджетынан 7 миллион 800 мең һум аҡса бүленгән.

**Алик ШАКИРОВ.**

# КОТЛАЙБЫҘ!

Өфө ҡалаһында йәшәүсе

**Миңнегөл Хәмзә ҡыҙы**
**ДӘҮЛӘТОВАны**

тыуған көнө менән ҡайнар ҡотлайбыҙ! Һинә ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер теләйбеҙ. Тормош юлың бәрәкәтле, бәхетең мул, килер көндәрең ҡотло, шатлыҡ-ҡыуаныстарға бай булһын. Барыбыҙға ла ышаныслы терәк, изге йәнле, ағымлы, оло йөрәкле, яҡындарың өсөн ярарлыҡ кеше булып ҡал.

*Ғүмереңдең яҡын киләсәген*
*Алһыу таңдар аша ҡаршыла.*
*Юлдарыңда булһын гел шатлыҡтар,*
*Бәхет көтөп торһон ҡаршыңда.*
*Ҙур уңыштар юлдаш булһын,*
*Көндәреңдә шатлыҡ биҙәһен,*
*Сәләмәтлек - ярты бәхет, тиҙәр,*
*Ошо бәхет ситләп үтмәһен!*

**Ҡотлау менән тормош иптәшең Рөстәм, ҡыҙың Ынйы.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Ноябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (1) дүшәмбе | 7:57 | 9:27 | 14:30 | 17:01 | 18:31 | 20:01 |
| 5 (2) шишәмбе | 7:59 | 9:29 | 14:30 | 16:59 | 18:29 | 19:59 |
| 6 (3) шаршамбы | 8:01 | 9:31 | 14:30 | 16:57 | 18:27 | 19:57 |
| 7 (4) кесе йома | 8:03 | 9:33 | 14:30 | 16:55 | 18:25 | 19:55 |
| 8 (5) йома | 8:05 | 9:35 | 14:30 | 16:54 | 18:24 | 19:54 |
| 9 (6) шәмбе | 8:07 | 9:37 | 14:30 | 16:52 | 18:22 | 19:52 |
| 10 (7) йәкшәмбе | 8:09 | 9:39 | 14:30 | 16:50 | 18:20 | 19:50 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**2 ноябрь "Минең ғаиләм"** (Т.Дәүләтбирҙина), мелодрама

**3 ноябрь "Хыялый"** (С.Әбүзәр), лирик комедия

**6 ноябрь "Experiment"** (В.Красногоров), психологик драма

**6 ноябрь Н. Асанбаевтың хәтер кисәһе**

**9 ноябрь "Ер менән Күк араһында"** (Т.Ғиниәтуллин, Р.Кинйәбаев инсц.), өндәге күрәҙәлек

**10 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

*Яугирҙәрҙең берене лә ниҙән ҡурҡыуы тураһында әйтергә батырсылыҡ итә алмай. Башҡаларҙы көс менән еңеү әле ысын еңеү түгел. Иң ҡыйыу яугир - ул үҙендәге ҡурҡыуҙы еңгән, үҙенең кире яҡтарын таныған кеше.*



*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

# ЕҢЕҮ ЯУЛАЙ

## документаль фильмдар...

**Украинаның Хмельницкий өлкәһе Каменец-Подольский ҡалаһында үткән "АгроСвит-2013" XX халыҡ-ара ауыл хужалығы программалары телефестивале йомғаҡтары буйынса "Башҡортостан" киностудияһының йыраусы Абдулла Солтанов тураһындағы "Күңелдән сыҡҡан йыр" документаль фильмы (режиссеры Радик Килмәмәтов, сценарий авторы - Мәүлит Ямалетдинов) икенсе урынды яуланы, ә төп герой буйынса махсус диплом менән билдәләнде.**



Телефестивалдә тағы бер диплом менән йәш режиссер Айнур Асҡаровтың "Әсе бал" документаль-уйын фильмынан (сценарий авторҙары - Шәүрә Шәкүрова, Айнур Асҡаров) төп герой ҡарт солоҡсо Әнүәр Дилмөхәмәтов бүләкләнде.

"Башҡортостан" киностудияһы был фестивалгә 2012-2013 йылдарҙа төшөрөлгән дүрт фильм тәҡдим иткән булған. Үрҙә телгә алынған ике фильмдан тыш, телефестивалдә фильм-портреттар ҙа күрһәтелгән. Улар: йәш режиссер Роман Пожидаевтың - "Ер кешеһе" (сценарий авторы - Зөһрә Буракаева) һәм режиссер Мәрйәм Закирйәнованың Йылайыр районынан билдәле имам-хатиб Нуретдин Игебаев тураһында "Фатиха" (сценарий авторҙары - Мәрйәм Закирйәнова, Мәғәфүр Тимербулатов) фильмдары. Уларҙың продюсеры -"Башҡортостан" киностудияһы директоры Азамат Хужахмәтов.

## ...телевизион тапшырыуҙар

**Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Көндәлек" мәҙәни-мәғариф тапшырыуы "Көмөш ҡаурый-2013" XII Халыҡ-ара журналистар асыҡ ижади конкурсының финалына сыҡты.**



Башҡортостан юлдаш телевидениеһында "Көндәлек" икенсе миҙгел генә барыуына ҡарамаҫтан, ул иң популяр проекттарҙың береһе булып өлгөрҙө.

- Тапшырыу башҡорт теле дәресе һымаҡ алып барыла, ундағы "уҡыусылар" - төрлө йәштәге һәм төрлө һөнәргә эйә булыусы бер район кешеләре контроль эш яҙалар. Алып барыусы Фәрхәт Ғәйнетдинов уҡытыусы ролендә сығыш яһай. Үҙенсәлекле ярышта "класташтарға" райондың арҙаҡлы кешеләре ярҙам итә, - тип һөйләй тапшырыуҙың авторы БР-ҙың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты Рәшиҙә Мәһәҙиева.

Быйыл "Көмөш ҡаурый" конкурсында 13 илдән - Әрмәнстан, Белоруссия, Грузия, Испания, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Латвия, Польша, Рәсәй, АҠШ, Үзбәкстан, Украина һәм Эстониянан журналистар ҡатнашҡан. Конкурсҡа тәҡдим ителгән 700-ләгән медиа эштән жюри ағзалары 80-ен финалға һайлап сығарған.

## ...һәм сәсәниәләр

**2005 йылда Ҡалмыҡстандың баш ҡалаһы Элистала Халыҡ-ара эпик әҫәрҙәрҙе башҡарыусылар фестивале уҙҙы. Форум төрлө төбәктәрҙән һәм илдәрҙән эпик әҫәрҙәрҙе башҡарыу оҫталарын йыйҙы. Төрлө йылдарҙа Башҡортостандан был фестивалдә сәсәндәр Асия Ғәйнуллина, Баязит Ғәйнуллин, Илсен Мирхәйҙәров, Розалия Солтангәрәева ҡатнашҡан булған.**

Быйыл республикабыҙҙан был сарала М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттары Рида Тимершәйехова һәм Зилиә Әбелгәтинә сығыш яһаны.

-"Сәхнәлә - Башҡортостан!" тип иғлан иткәс, зал алҡыштарға күмелде, - тип һөйләй ҡыҙҙар. - Сөнки Ҡалмыҡстан беҙҙең республикабыҙҙы бик яҡшы белә. Ҡалмыҡстан делегацияһы йыш ҡына Башҡортостанда була, улар беҙҙең яҡтың хозур тәбиғәте, халҡыбыҙҙың ҡунаҡсыллығы һәм эскерһеҙ булыуы хаҡында һоҡланып һөйләй.

"Яңғыҙ сығыш" номинацияһында Рида Тимершәйехова "Урал-батыр" башҡорт эпосынан Аҡбуҙат тураһында юлдарҙы, ә Зилиә Әбелгәтинә Урал-батырҙың васыятнәмәһен көйләп башҡара. Йәш сәсәниәләрҙең тасуири тел, пластика, эҙмә-эҙлекле эпик башҡарыу стилендә көйләүҙәре тамашасыларға, жюри ағзаларына тағы бер ҡабат башҡорт эпик ҡобайырының өҫтөнлөктәрен асып һала. Алтай өлкәһе, Яҡут-Саха, Адыгей, Дағстан Республикаларынан һәм Ҡытайҙан килгән һәләтле эпос башҡарыусылар, Удмуртияның импровизатор-йырсылары араһынан беҙҙең Рида Тимершәйехова менән Зилиә Әбелгәтинә был ярыштың еүеңселәре тип танылды.

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# ҺӨРӘ, ШАПАТА...

**Күбәләк-тиләүҙәр, барын-табындар лөғәтендә бик йыш ҡына ҡолаҡҡа салына был ике һүҙ. Улар башҡа төбәктәрҙә, мәҫәлән, башҡаса яңғырай. Һүҙҙәрҙе сағыштырып, тамырҙарын юллап ҡарайыҡ. Әлбиттә, былар минең фараздарым ғына. Башҡаса аңлатмаларын белеүселәр булһа, рәхим итегеҙ, беҙгә яҙып ебәрегеҙ.**

**Һөрә** - бергилке, бер ни тиклем, бер һыуһын мәғәнәһендә. Әйтәйек, "Бер һөрә бесән сабып килдек". Һаҡмарҙың урта ағымында, мәҫәлән, "Бер быуа (бер һыуһын) бесән сабып килдек", тип әйтәләр. "Һөрә" һүҙен "һөрөү"-ҙән йә "һөйрә"нән килеп сыҡҡандыр тип уйланыла. Әйтәйек, ер һөргәндә алдан билдәләнгән бер ҡырҡым ерҙе "бер һөрә" тип әйткәндәрҙер, ә "һөйрә"гә килгәндә, бер һөйрәтеп алып килерлек ағас, бесән, һалам һ.б. әйбер мәғәнәһе.

**Быуа** - әйтәйек, айлап ҡына ағып ятҡан шишмә һыуы быуылһа, быуа, йәғни күмәктең айырым бер тос өлөшө барлыҡҡа килеүенән алынғандыр бындай сағыштырыу һүҙе..

**Шапата** - үҙ-үҙен, кейемен ҡарамаған, ҡылыҡтарын контролдә тотмаусы алабарман кеше мәғәнәһендә. Әйтәйек, булыр-булыр ҙа, шундайын шапата кеше булмаҫ. Был һүҙҙең нисек барлыҡҡа килеүен тоҫмаллар өсөн батҡаҡта шапылдап, ауыҙына ни эләкһә, шуны ашап-эсеп, бысраҡ һыуға ҡойоноп йөрөгән сусҡаны йә өйрәктә күҙ алдына килтерергә кәрәктер. Шапата - "шапылдау"ҙан алынғанға оҡшаған. Һаҡмарҙың урта ағымында бындай сифатлы кешене һашшаҡ тиҙәр. Был һүҙҙең тамырын аңлатыусы кеше булырмы икән?

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮҢЕЛЕ КИҢДЕҢ...

## донъяһы киң

Хәҡиҡәтте белмәү ғәйеп түгел, белә тороп күрмәү - оло ғәйеп.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешеләр үҙгәрә ул, тик был турала башҡаларҙы иҫкәртергә онота.

**(Лилиан Хеллман).**

Алйоттоң һүҙҙәре мәғәнәһеҙ булһа ла, ҡайһы саҡта улар аҡыллы кешене лә алйырғатып ҡуя.

**(Николай Гоголь).**

Ысынлап та лайыҡлы булған маҡтауҙарҙы вайымһыҙыраҡ тыңлаһаҡ та, бер ниндәй хоҡуғыбыҙ ҙа булмаған маҡтауҙарҙы иҫәбеҙ китеп тыңларға яратабыҙ.

**(Оливер Голдсмит).**

Тормош старттан финишҡа тиклем юртып, бер ҡайҙа ла боролмай торған ат түгел.

**(Джон Голсуорси).**

Бәхет - бүләк. Ул ҡышҡы урмандағы күбәләк кеүек ҡапыл ғына пәйҙә була. Уға үҙенә яҡынларға мөмкинлек бирергә генә кәрәк.

**(Эдит Вартон).**

Йыйырсыҡтар элек йылмайыу булған урынды ғына билдәләп торһон.

**(Марк Твен).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ яугир егеттәр бер майҙанға йыйылып, үҙҙәренең иң батыр һәм еңелеү белмәҫ һуғышсы икәнлеген иҫбат итер алышҡа сыҡҡан. Улар ҡылыс менән дә, уҡ-һаҙаҡ менән дә көрәшкән, ҡоро ҡул менән арыҫланға һәм айыуға ҡаршы алышҡа ла сыҡҡан. Башҡа төрлө һынауҙар ҙа күп булған. Әммә күпме генә көрәшмәһендәр, күпме һынауҙар аша үтмәһендәр, күҙәтеүселәр улар араһынан иң батырын һәм ҡурҡыу белмәҫен һайлап ала алмаған.**

**Шунан был яугирҙәр уларҙың бөйгеһен күҙәтеүсе йәш ҡыҙға мөрәжәғәт иткән:**

**- Беҙҙең аранан иң батыры һәм ҡыйыуы кем, билдәлә, зинһар,- тигәндәр.**

**Ҡыҙ ризалашҡан һәм яугирҙәргә шундай һорау биргән:**

**- Улай булғас, кем миңә үҙенең холҡондағы йомшаҡ яҡтарҙы һанап сыға, был тормошта иң ҡурҡҡаны ни икәнен әйтә?**

**Яугирҙәрҙең берене лә үҙендәге йомшаҡ яҡтарҙы, ниҙән ҡурҡыуы тураһында әйтергә батырсылыҡ итә алмай.**

**- Башҡаларҙы көс менән еңеү әле ысын еңеү түгел. Иң батыр һәм иң ҡыйыу яугир - ул үҙендәге ҡурҡыуҙы еңгән, үҙенең кире яҡтарын таныған кеше, - тигән ҡыҙ..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 1 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 4061